


# ҺАНДУҒАСТЫҢ ҺАЙРАР ҒҮМЕРКӘЙЕ

— Һай, һай, һай, һай, һай… — рәт-рәт булып теҙелгән аҡ күлдәкле ҡара костюмлы ирҙәр бер үк ритмда бер үк һүҙҙе ҡабатлай, — һай, һай, һай… — Мәҙинә өтәләнә, дирижер пультына баҫҡан да алдындағы партитураға үрелә. Хачатуряндың «Поэма»һы. Әммә Мәҙинә иғлан итергә өлгөрмәй, унын эргәһендә, иҙән ярығынан сыҡҡан төҫлө, көмөрө профессор пәйҙә була:

— Ярамай! Тыйылған!

Мәҙинә уңайһыҙлана, үҙенә текәлгән хор коллективынан ояла, ҡулы ирекһеҙҙән икенсе партитураға үреләә:

— Прокофьев. Алтынсы симфония. — Мәҙинә дирижер таяғын күтәрергә лә өлгөрмәне, баяғы бөкөрөнөң ялтыр башы, күҙлек аша самаһыҙ ҙур күренгән шешмә ҡабаҡтары артында күҙҙәре уҫал ялтырана:

— Ярамай! Тыйылған!

Мәҙинәнең маңлайына тир бәреп сыҡты, капелла һаман бер үк ритмда, бер үк һүҙҙе ҡабатлай:

— Һай, һай, һай…

Инде Мәҙинәнең тауышы баҙнатһыҙланды, үҙенең әйткәндәрен үҙе саҡ ишетә:

— Вано Мурадели... «Бөйөк дуҫлыҡ»...

Был юлы ялтыр башлы бөкөрө профессор түҙмәне, Мәҙинәнең ҡаршыһына ялп итеп килеп баҫты һәм, барлыҡ партитураны йомарлап, киҫәктәргә йыртып, Мәҙинәнең йөҙөнә ырғыта башланы:

— Һин, Ирназарова, ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Совет музыкаһында декадент ҡараштар тураһында»ғы ҡарарын уҡымағанһың! Уларҙы формалистик ҡараашта торған композиторҙар ижад иткән! Улар совет халҡына ҡаршы йүнәлтелгән! Ултыр, ике! Был һиңә ирендең йөғонтоһонан килә, эйе, эйе! Халыҡ дошмандарына совет консерваторияһында урын юҡ!

— Ах! — Мәҙинә, алйыған профессорҙан йөҙөн һаҡларға була артҡа тайшанды, сигенеүе булды — сәхнәнән ҡайҙалыр түбәнгә тәгәрәне. — Ах! — Осоу туҡтағас, ул күҙҙәрен асты. — Мин быларҙы белә инем, уҡығайным...

Мәҙинә, үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңламайынса, күҙҙәрен йөрөттө: тар ғына ишек, сыуал. Ҡаршыһына һайғау тартылған, уға ниндәйҙер еүеш кейемдәр эленгән. «Мин ҡайҙа? Ә капелла, ә көмөрө профессор...» Бәй, ул бит ферманың ҡарауылсы өйөндә ята! Эйе, эйе... Шул өй... Ана баҡырса, уның морононан сыуалдағы ҡуҙға һыу тама, ҡапҡасын ҡалтыратып, боҫ бөркөлә.

Тамам уянған Мәҙинә ҡалҡынып тороп ултырҙы. Муйынын уратып бәйләгән суҡлы шәле тынын ҡыҫа, өҫтөнән һырмаһын да сисмәгән. Эй-й-й... ул бит бөгөн фермала дежур. Көн дә бер һауынсы шулай быҙаулау бүлегендә төнгөлөккә ҡала. Мәҙинә һыйырҙар янына әллә нисә барып әйләнде. Ахыр сиктә, таңғы йоҡоға түҙмәйенсә, йоҡлап киткән. Ә ҡарауылсы... Ғәләүетдин ҡайҙа икән? Ярай ҙа һыйырҙарға ул күҙ һалһа... Тышта аяҡ тауыштары ишетелгәс, Мәҙинә итәк-еңен рәтләне, шыуып, аяҡтарын һәлендереп, ширҙеккә ултырҙы. Ишектән ҡар һырыған тунын бүрке менән ҡаҡҡыслап Ғәләүетдин инде:

— Бурай ғына... Мәҙинә, әллә һин йоҡтаманың?

— Йоҡтағанмын... Яңы торҙом. Һыйырҙар...

— Мин әле шунан киләм.

— Бөйрәкәй көйшәйме?

— Көйөш алыуын ала... Бер-ике сәғәттән быҙауҙар микән?

— Уй, мин..

— Сыҡма әле, сыҡма... Ашығырҙығы юҡ. Сыуалға картуф тәгәрәткәйнем. Ана сәй ҙә ҡайнаған...

Ғәләү йышылмаған таҡталарҙан әтмәләнгән өҫтәлгә ике көрөшкә ҡуйҙы, көл араһынан сипсы менән тартып бер нисә картуф сығарҙы.

— У-у... бешерә! Ҡарындаш, яҡында, һырманды һалып тор, тәнең ял итер. У-у... мындай тәмде ризыҡты Мәскәүҙәге һинең профессорҙарың да ауыҙ иткәндәре булмағандыр, шәй... Әйҙә, әйҙә...

Мәҙинә боҫ бөрккән картуфты икегә бүлде, төшө менән өнө араһында албырғап, һаман иләмһерәп ултыра бирҙе. Ә теге «һау, һау, һау» тигән тауыш һаман ҡолағында яңғырай. Ул әллә ҡайҙан, тауҙарҙан, ундағы йөҙйәшәр ағастарҙан, ҡаяларҙан килгән кеүек...

— Ғәләүетдин ағай, ә... буран сығырға торған кеүек түгелме?

— Юҡсы... Ҡар ғына яуа... Тыныс...

Ғәләүетдиндең әйткәне тынысландырманы Мәҙинәне. Уның һәр тауышҡа, өн-ауазға һиҙгер ҡолағы, ҡолағынан да һиҙгерерәк йөрәге ҡайҙалыр алыҫта, ерҙәме, күктәме, көслө буран булып ябырылыр гәрәсәт килгәнен тойғандай.

— Бөгөн бесәнгә нисә сана сығаралар икән?

— Әллә... Саяф ни тиер... — Мас килеп картуф менән һыйланған Ғәләүетдин артыҡ бошонманы, Мәҙинәне лә тынысландырырға тырышты. — Калхуз малына ни булһын... Табырҙа-а-ар...

— Мин китәйем әле! Саяф ағай килһә, әйтәйем, запас әҙерлә-

һендәр, буран сығасаҡ, ағай! Оҙаҡ-һыҙ тынмаясаҡ!

* * *

Был мәлдә Тирәкле ауылы халҡы таңда ғына күрелер осор төштәрен күреп тәмле йоҡоһон дауам итте. Бары биш-алты өйҙә генә шәмгә ут алдылар. Улары һауынсылар, малсылар йәшәгән өйҙәр. Ҡар инде ҡыш урталарына тиклем байтаҡ өйҙәрҙе яртылаш, ҡайһы бер тәпәшәгерәктәрен бөтөнләй күмеп киткән. Өйҙәр менән өйҙәр араһында «сысҡан һуҡмаҡтары» һалынған. Әле кәртәләнгән, күңелгә шөбһә һалып йөҙгән ҡараһыу болоттар аша ҡапыл килеп сыҡҡан ай ауылдың йоҡоло, талсыҡҡан йөҙөн аңғармаҫтан күрһәтеп ала ла, йәнә шул ҡара ятыуҙай өйөрмәләр эсенә йәшеренә. Бынан, ферма үренән, ауыл ус төбөндәгеләй күренә. Ай бер килеп сыҡҡанында Мәзинәләрҙең дә өйөн яҡтыртты. Уның ферма яғына ҡараған берҙән-бер тәҙрәһендә ут шәүләһе ялтыраны. Маһинур инәһе тороп, усаҡ аҫтына ут яҡмаҡ, Дауыт өшөмәһен тип, өйҙө йылытмаҡ, күрәһең. Ул барҙа Мәҙинәнең балаһы өсөн дә, өйө өсөн дә күңеле тыныс. Ут Мирхәйҙәровтар өйөндә лә ҡабынды. Иртә тора икән председатель. Сәйф тыңламаһа, бәлки, председателдең үҙенә барырға кәрәктер Мәҙинәгә? Мәҙинә кеҫәһендәге шырпы менән туҙҙы ҡапшаны. Ҡараңғыла оҙон кәртәгә яңғыҙы барып инеү әллә ҡайһылай, ҡурҡыта. Тик, нишләмәк кәрәк, һыйыр быҙаулап, сыуын ашаһа, һөтө булмай, тиҙәр. Ҡар яуыуҙан туҡтаған булды, мәгәр Мәҙинәнең күңеленә шом һалған тауыш баҫылманы...

* * *

Төн Ихсанбай өсөн үҙен-үҙе язалау миҙгеленә әүерелде. Кеше күҙенә салынып, әҙәм балаһына ек күремсеһе булып йөрөүҙән ҡурҡыуҙанмылыр, ул көндө йоҡлап үткәрә. Ҡасандыр ел-бурандан һаҡланып төнгөлөккә яптырған тәҙрә ҡапҡастарын да астырмай. Шулай ышығыраҡ. Йәне ҡурсыулы. Әсәһе, әҙәм балаһын ике яурынындағы ике фәрештәһе һаҡлай, ти торғайны. Ул фәрештәләргә генә ышанып ятһаң, хәҙер аҫҡа шәре инә башлар. Теге саҡ ул шәре ингән ерҙән ҡотолоп ҡалды ла бит, гел улай яйы сығып тормаҫ. Яйы сыҡҡан хәлдә лә ниндәй хаҡҡа? Ихсанбайҙың хәҙер кеше тип әйтер ере лә ҡалмаған.

Ней өйө эсендә күңеленә һиллек биргән зат юҡ. Рауза — торғаны һайыҫҡан. Иҫәрҙән һорама, үҙе әйтер, тигәндәй, осраған берәүгә барын-юғын шыҡырыҡтарға ғына тора. Алдынан артың хәйерле, тип ҡайтарып ҡына ебәрер ине — шыпа яңғыҙлыҡтан, йәнә ашнаҡсыһыҙ, ялсыһыҙ ҡалыуҙан ҡурҡа.

Эйе... Бола шул Ихсанбайҙың күңел донъяһы, уйым-уйым ҡара ятыуҙарҙан ғына торғандай. Илдән дә тәртип китте. Сталин барҙа баш осондағы ҡоҙғондар көн дә берәүҙе сүпләһә лә, тәртип булды. Барған юлың асыҡ, тура ине. Хөкүмәт асылда уҡымышлыларҙы сүпләне. Шуларҙы яратманы. Ә Ихсанбай кеүек эшләй белгән наҙанға ҡағылманы. Уға райондан килгән ниндәй генә түрәләр теш ҡайраманы! Ихсанбай бирешмәне: алдарына күрһәткестәре яҙылған ҡағыҙҙы йәйеп һала ла, таянғаным яр булһа, тип оло хәжәтен башҡарыуын дауам иткән Хужа Насретдиндәй, тыныс ҡына ултырыуын белде. Етмәһә, Ихсанбай райондың башҡа хужалыҡтарының да күрһәткестәрен яҙып барҙы. Сығыштарында сағыштырыу өсөн шуларҙы файҙаланды. Бына шулай ҡотолдо ул күп бәләләрҙән. Хәҙер бына хөкүмәт башына Маленков тигән берәүҙе ултырттылар. Ленин менән Сталин фамилиялары үҙе ни тора ине! Был бахыр — Маленков. Шундай ҙур дәүләт һәм... «Мин бик бәләкәймен шул!» тип ҡысҡырып торған фамилиялы етәксе. Булмай ул бынан, тота алмай ул илде. Ярай, тота ла алмаһын, китһен дә ти. Ә унан һуң кем килер? Рәсәй кеүек ғүмер баҡый хандарға буйһоноп, улар ҡушыуынса йәшәп өйрәнгән халыҡҡа ҡаты

ҡуллы хужа, ихтыярлы, көслө баш кәрәк.

Ихсанбай Тирәкле ауылы етәкселәре менән дә ҡәнәғәт түгел. Мирхәйҙәровын да әйтер ине... Уҡытыусы булғас, уҡытып ҡына йөрөһә ярамағанмы? Председатель булғас та уҡытыусы холҡонан арына алманы: кем матур һөйләй, шуны тыңлай, шуға ышана, шуны маҡтай. Ә бит тормошта күберәк шунең киреһе: ҡулынан эш килгән кеше күп һөйләмәй. Һин, аңра булмаһаң, унын күрһәткестәренә ҡара. Шунан ғына күтәр, шунан ғына маҡта. Юҡ, Азат яңылыша. Азат Әһли улы Мирхәйҙәров тигән колхоз председателенә ҡарағанда Сынтимер Әһли улы Мирхәйҙәров тигән мәктәп директоры күпкә көслөрәк ине. Күрәһең, Мирхәйҙәровҡа мулла ҡушҡан исеме күберәк көс биргән, Азат исемен һуңыраҡ, һуғышҡа китер алдынан алды. «Тыуыу тураһындағы таныҡлығы»на «ҡыҙыл» атаһы шулай тип яҙҙырған булған...

— Эйе... колхоз хәҙер әйҙәнсек һарыҡ һымаҡ, гел бер урында урала, гел бер урында тапана. Тракторҙары, комбайндары, сәскес, урғыстар бар. Их, шулар Ихсанбай заманында булһа! Ауыл халҡына быҙау сығарыр ер, ҡаҙ көтөр аршын ҡалдырмай һөрөп-сәсеп бөтөр ине ул! Тапатһалар — штраф, урлаһалар — төрмә! Йәшелсәһен, емешен үҫтереп һатып ҡына колхозды серегән байға әйләндерер ине Ихсанбай. Ауылда әлегә тиклем электр уты юҡ. Ыҫтырам! Үҫтергән нәмәләрен ҡайҙа һаҡларға белмәйҙәр. Ихсанбайҙың һуғыш мәлендә район түрәләре белмәгән келәте булды. Йәшерһә йәшерҙе, унын ҡарауы, ул яҙ орлоҡ һорап бит һыуын түгеп йөрөмәне. Ә балыҡ?.. Балыҡ менән Ихсанбай әҙәмде астан үлтермәй алып сыҡты, былар, тфү, шуны ла тотоп һатып аҡса яһай белмәйҙәр! Әгәр ҙә Ихсанбай ошо уйҙары менән Мирхәйҙәровҡа барһа?.. Һәй, аңлар тиһеңме уны... Уҡымышлы кешеләрҙең бер яраҡан һүҙе бар бит — утопия. Шулай тип әйтәсәк Азат. Был тиклем эштәрҙе башлап осона сығыр өсөн борондан, ҡанындан килгән ҡатылыҡ кәрәк — ярлыла ул сифат ҡайҙан булһын? Тай ат булғансы, хужаһы эт була, ти. Власҡа килгән бөгөнгө етәкселәрҙән хужа сыҡҡансы, илдең биле бишкә бөгөлөр, өҙөлөп китмәһә әле...

— Эх! — Ихсанбай, сараһыҙлыҡтан ауыҙлыҡ сәйнәгән айғыр кеүек борһаланып, һыңар күҙен секерәйтеп, мендәренә ауҙы. Теге күрше урыҫ ауылында «айыу итенә» алыштырған көмөшкәһе лә бөтөп бара.

— Рауза!

Ҡарсыҡты баҙға төшөрөргә ине — Рауза тауыш бирмәне. Йоҡо мисҡәһе. Ашауҙан түгел, йоҡонан һимерә микән әллә был бисә заты? Айыу өңөнә йомарлап тығып ҡуй инең шул Раузаны. Ятһын ине усын ялап, тормаҫтан ойоп...

— Рауза! Бисә тейем! — Ихсанбайҙың тауышы был юлы ярайһы көр сыҡты. Хатта гәҙәттәге ғыжлаусыйылдауы кәмегән кеүек булды.

— Ним-ә-ә... — Аш бүлмәһендәге Рауза тороп ултырҙы ахыры — урындыҡ таҡталары шағыр-шоғор итте. — Атаҡ, атаҡ... У кем у?! Ишмәмәт?! Аһ-аһ... Теге... пельменной Ихсанбайҙы төштә күрәм... Имеш тим, кәнсәгә ут яғырға барғанмын. Үрелеп йүшкәне асып торһам, шул ҡәһәр һуҡҡан килеп ас билемдән ҡыҫып тотоп алмаһынмы!

— Ярай, күп тәтелдәмә... Төш тыңдарға мин һиңә ҡарсыҡмы? — Раузаның ҡаты ҡолаҡ булыуы арҡаһында урынынан ҡупҡан Ихсанбай ҡараңғыла юрған эсендә тулҡынған Раузаға берҙән-бер күҙен секерәйтте. — Төш баҙға! Алып сыҡ!

— Аһ-аһ... Ҡалайтып... У ни бөткән шикелде ул...

— Теләһәң ҡайҙан тап!

— Аһ-аһ... Табырға унын ҡойоһо бармы беҙҙә?

— Бисә-ә! — Ихсанбайҙың ауыҙынан йылан ыҫылдағандай сыҡҡан был тауыш Раузаны һиҫкәндерҙе, йөрәген ҡалтыратҡан дерелдәү теҙҙәренә, унан үксәләренә төштө.

— Хәҙер...

Күп тә үтмәй Раузаның сыра яҡтыһында аҡ айыуҙай яҡтырған оло кәүҙәһе йәтеш ауыҙлы баҙға бурһыҡ йылғырлығы менән төшөп юғалды...

Баҙҙағы фляганың төбөндәге һарҡындыны сүмескә бушатып, ыштандан ғына аяҡтарын урындыҡтан һәлберәтеп көтөп ултырған иренең алдына ҡуйғас, Рауза еңел тын алды. Ул арала Ихсанбай шәмгә ут алғайны, Рауза, өй һыуып киткәндәй булғас, кире урынына ятып, башынан аша үҙенең баҡта юрғаны менән бөркәнде.

— Рауза... — Эсенә шайтан төкөрөгө ингән Ихсанбай тыныслана төштөмө икән, тауышы көйләнеберәк киткәнгә оҡшаны.

— Йә, шунан?

— Мирхәйҙәровтың мине... һорашҡылағаны юҡмы?

— Кемдә кем ҡайғыһы... — уңайлап ятып алған рәүешенән ҡәнәғәт Раузаның һүҙҙе сурытырға иҫәбе юҡ икәнен һиҙһә лә, Ихсанбай төбәшеүен белде. — Ә халыҡ?

— Кәпрәткә йомошҡа килгән кешелә һинең ҡайғымы?

— Ҡайғыһы юҡ та, ҡайғыһы юҡ... Һин нимә эреләнеп киттең әле? Йүндәп хәбәр һөйҙәгән юҡ, һорашҡанға арып та ярып яуап...

— Ай алла! Кемдең тәмде йоҡо ваҡытында хәбәр һөйҙәгеһе киһен?! Һин төн убыры шикелде утырғас та, миңә бит таң тишегенән эшкә!

— Таш аҡтарып йөрөмәйһең әле...

— Атаҡ, таш аҡтармаһам ни... Минеке бит баш эше! Шитай, бөтөн ауыл...

— Ярай, ярай... Бер нәмә әйтер хәл юҡ... Нимә генә һорайым тигәйнем әле... Анау... Мәҙинәнең һыйыры тәки табылманымы?

Уш-пыш килә башлаған Раузаны иренең һуңғы һорауы сығырынан сығарҙы:

— Какуй делаң бар һинең Мәҙинәнең һыйырында?! Мал түгел, кеше үлән араһына, иҙән ярығына төшкән энәләй юғала! Шитай, ана Фәүзиә ҡарсыҡтар, Ихсанбай, Сәбилә, Зарифа, йәнә Мәҙинәнең ҡустылары! Шуларҙы йоҡтай алмай уйҙап ятһаң бер хәл, атыу... һыйыр!

— Етте! — Ихсанбай ҡыҙа биреп урынынан ҡалҡынды. — Ишеттеңме?!

— Диуана... — Рауза шуны әйтте лә тынды. Кәрәсине бөткән шәм ялпылдай бирҙе лә һүнде. Өйҙө тағы мәмерйәләге шикелле ҡараңғылыҡ, шундағы кеүек үк тынлыҡ баҫты. Ихсанбай аҫтындағы түшәген һәрмәне. Кейеҙ. Унда, мәмерйәлә, йәнлек тиреләрендә яттылар. Стенаға ла йәнлек, ат, һыйыр тиреләре тартылғайны. Бер яғынан тыныс та булған. Сыуалдан утты өҙмәһәң бик ҡалтыратмай ҙа, ләкин... Ул йәнә тороп йүшкәнә асты, тәмәке ураны. Ашығып-ашығып шуны һурған ыңғайға йөрәге өшөнө, ситлеккә бикләнгән йәне тыпырсынды: «Ҡәберҙәй ҡара төн, бөгөрөңә үтер ҡәбер һыуығылай... тормош. Ни бысағыма тыуҙы икән Ихсанбай был донъяға?! Мәҙинәнең дә хәҙер иң ауыр ваҡыты: ир юҡ, ҡайтыу-ҡайтмауы билдәһеҙ; атай төрмәлә. Әгәр Ихсанбай ошо рәүешле имгәнмәгән булһа... Бәлки, әле лә һуң түгелдер? Бисә бит инде Мәҙинә. Ҡыҙ түгел. Бисәләрҙе бит яулау, үҙеңдеке итеү өсөн бер ҡороҡҡа эләктереү етә... Эйе, эйе! Йәне йәһәннәмгә киткере мәңге ҡотаймаҫ колхозды уйлап башын ауырттырғансы, нишләп әле Ихсанбай үҙ тормошон ҡотло итеү әмәлен уйлап баш ватмай? Сүместәге шыйыҡсаны төпләгәс, Ихсанбай, йүшкәне ябырға ла онотоп, кире урынына ауҙы. Мөрйәләге ел уйнауы бүре олоуын хәтерләтә, йәнә ҡайҙалыр алыҫта ниҙер үкерә, ҡотора, тулай кеүек... Әллә уға тыныс йоҡлар өсөн Күкбүре етмәй микән?

* * *

Район советының сираттағы сессияһынан Камалетдиновтың башы ауыртып сыҡты. «Ҡышҡы шарттарҙа мал башын һаҡлау һәм үрсемде, малсылыҡтан килгән табышты арттырыу» буйынса докладты районның баш зоотехнигы һөйләне. Бөтәһе лә дөрөҫ кеүек. Малға етер-

лек аҙыҡ бирәмегә әҙерләнгән, ҡоралар йылы, малсылар етерлек, ә ни өсөндөр һауым түбән, быҙауҙар үлә, һимертеүгә ҡуйған малдар кәрәкле көрлөктә тапшырылмай. Берәүҙәр колхоз эшенең алға бармауын шәхси стимул булмауҙан күрә. Халыҡ ярлы йәшәй, яҡшы эшләгәндәргә лә, эшләмәгәндәргә лә бер үк ҡараш. Камалетдинов бөтә хужалыҡтарҙа ла «Почет таҡтаһы» булдыртты, егәрле колхозсыларҙың фотоларын райком алдына ла ҡуйҙыртты. Ә күрһәткестәр — шул уҡ.

Райком алдында Тирәкленең председателен күргәс, Әйүп Ғәзизович йәнләнә төштө:

— Ҡайтмаған икәнһең дә... Әйҙә, ин. Һөйләшеп ултырайыҡ.

Мирхәйҙәров үҙе лә Камалетдиновты көтөп торҙомо икән, ҡыуаныуы йөҙөнә сыҡты:

— Эйе бына... Бер килгәндә...

Камалетдиновҡа Мирхәйҙәровтың кабинетты тәү күргәндәге шикелле байҡап ҡарап ултырыуы ҡыҙыҡ тойолдо:

— Берәй нәмә үҙгәргәнме?

— Хәҙер көн дә бер нәмә үҙгәрһә лә аптырар эш юҡ, былай. Әле Маленков ине, хәҙер Хрущев тигәне шытып сыҡты. Шуға ҡарайым да, мәйтәм...

— Әллә инде, Азат Әһлиевич... Бынау Маленковы арыу ғына тартҡан кеүек ине. Крәҫтиәнгә шәхси стимул тигән нәмәнең килеп сығыуына ла ҡыуанғайныҡ. Былай ни... ҡоро һүҙ, бүләккә — ҡағыҙ. Бына тағы, имеш, уның эшенән дә хата тапҡандар... Көн дә бер яңылыҡ... Һеҙҙә лә эштәр көйлө күренмәй.

— Әллә инде, — Азат Мирхәйҙәров ҡуйы ҡашы аҫтында малайҙарса бер ҡатлылыҡ менән йылтыраған зәңгәрһыу күҙҙәрен Камалетдиновҡа төбәне. — Мин, ҡустым, арыным шикелле. Булмаһа, ебәр мине.

— Һин дә шулай тигәс...

— Уҡытыусы бит мин. Колхозды тартырға, ҡустым, дөрөҫөн әйткәндә, көс етеңкерәмәй...

— Ошоға тиклем уфтанғаның булмағайны ла?

— Әллә... Ҡатын да сыҡ ти. Йәшерәк фронтовиктар бар бит. Эшләп ҡараһындар...

— Колхозсылар ни тиер... Уны бит мин хәл итмәйем... Һөт нишләп кәмей һеҙҙә?

— Һыйырҙар һыуалды...

— Һауынсылар... етешәме?

— Ялһыҙ эшләйҙәр...

— Мәҙинә нисек?

— Ул тана алды. Йәй бик ыҙалаған инде...

— Ыҙаланы тиһең?

— Ыҙаламай буламы? Себен осоронда... тана өйрәтеү... Ней атаһы ҡайтманы. Сәйерерәк яҡтары булһа ла, кешегә зыяны тейгән әҙәм дә түгел ине... Тәки теге игеҙәктәрҙең үлемен шуға яптылар микән?

— Үгеҙ ни хәлдә?

— Үгеҙ? Ул ни... уға ни булһын? Йә бер үҙең килеп сыҡмайһың, Әйүп Ғәзизович. Ҙур түрәләр килеп һөйләшеп китһә лә халыҡ әүҙемерәк ҡыбырлай башлай.

— Бына йыйылышығыҙға барырмын. — Камалетдинов календаргә тексәйҙе. — Ваҡыты үҙгәртелмәгәндер бит? Ә ни тиеүеңдә... сығам тигәнеңдә башҡа ишетмәйем, ағай...

Мирхәйҙәров ауыр ғына ҡуҙғалып урынынан торҙо:

— Юлды һепертә ине, буран сыға күрмәһен...

— Күрһәткестәреңде үҙгәртергә бер ай ваҡыт бирәм, Азат Әһлиевич!

Мирхәйҙәров өндәшмәй генә ишеккә ыңғайланы, Камалетдинов, рапорт ҡабул итергә йыйынғандағы кеүек, аяғүрә баҫты, тик: «Так точно, товарищ генерал!» тип ике бармағын сикәһенә терәүсе генә юҡ...

«Мәҙинә!» — йөрәк түрендә берсә һағышы, берсә шатлығы итеп йөрөткән исемде телгә алыу, икенсе кешенән дә шул алты хәрефтән торған моңло һүҙҙе ишетеү Камалетдиновтың ҡапыл күңелен күтәрҙе. Ни өсөн әле ул Мәҙинәне күреү шатлығын ете ҡат йоҙаҡ менән биктә торорға тейеш? Ни өсөн ул ғүмеренең һәр минутын, йөрәгенең һәр һу-

ғыуын үҙ-үҙе менән көрәшеп үткәрергә тейеш? Тирәклегә юл төшкән һайын ни өсөн әле ул осрашыуҙы кисектереү хаҡына унда барыуҙан баш тартырға тейеш? Эйе, Мәҙинә дуҫының ҡатыны. Камалетдинов бит уға йөрәген асырға, Мәҙинә юлына тоҙаҡ ҡororға йыйынмай. Ул бары тик ярата! Быға тиклем бер кемде яратмағанса ярата. Камалетдинов уны үҙенән дә, үҙен уратып алған яҡындарынан да артыҡ... Ҡапыл уның күҙ алдына аҡ йомғаҡтай ғына Флоридаһы килде. «Әйүп, һин аҡылдан шашаһың! Шулай уҡ һин Мәҙинәне... ҡыҙыңдан да», — Камалетдинов, ике усы менән башын ҡыҫып, ҡаты ыңғырашып кире урынына ултырҙы: «Кешеме һин, түгелме, иптәш Камалетдинов?!»

* * *

Мөғлифә әбейгә барып өс тапҡыр ҡот ҡойҙорғандан һуң балаһы тынысланғас, күңеле күтәрелде Мәликәнең. Флорида уйнай башланы, ашауы ла һәйбәт. Ҡыҙыҡайҙың йөҙө алһыуланды, күҙҙәрендә шаян осҡондар барлыҡҡа килде. Тик бына теле асылмауы ғына шомландыра. Лоҡман Талиповичтарҙың Әбүбәкеренең теле телгә йоҡмай. Ә был бала... Әйүпкә үҙенең хәүефен әйтер ине — ене ҡубыр тип ҡурҡа. Ишек асылған тауыш Мәликәне ҡапыл һиҫкәндерҙе. Ул. Үҙе. Нисек иртәрәк ҡайтҡан... Мәликә комодта ултырған «Красная Москва» хушбуйын йәһәт кенә һөртөштөрөп, ҡабарынҡы сәстәрен маңлай тирәһендә бейегәйтә бирҙе. Унан, йөҙөнә йылмайыу сығарып, еңел баҫып, йоҡа халатының еңдәре менән елпелдәп, рәүешенә бушамай йөрөгән ҡатын ҡиәфәте биреп, алъяҡҡа сыҡты.

— Абау, эттәһе ҡайтҡан икән, мин әле...

— Ашарға әҙерме?

— Эй Әйүпкәйем... Ҡатыныңдың ире ҡайтыуына ашарға әҙерләмәй торған сағы бар әллә?!

— Булмағас, яҡшы... — Ире ҡулъйыуғыстан ҡулдарын йыуған арала Мәликә ҡатырғансы үтекләнгән апаҡ таҫтамал килтерҙе.

— Эттәһе, ошоға ғына һөрт...

Күҙенә мөлдөрәп ҡарап, өлтөрәп торған ҡатыны Әйүптең күңелен әҙгә генә булһа ла эретмәй ҡалманы, шикелле. Ул ырыя ғына булһа ла ҡатынының бейек янбашынан ҡағып, хуш еҫ бөрккән сәстәренә иренен тейгеҙеп алды. Наҙға һыуһап йөрөгән Мәликәгә был етә ҡалды. Йәһәт кенә асыҡ иҙеүле халатынан күпереп күренеп торған тығыҙ түштәре менән иренең шауҡал, ләкин ҡайнар күкрәгенә һыйынды, аяҡ остарына баҫып, уның ҡапыл йылынып киткән күҙҙәренән алмаш-тилмәш үбеп алды.

— Иртәрәк ҡайтып, ҡайһылай...

— Флорида...

— Ул йоҡлай...

Әммә ир менән ҡатын мөнәсәбәте артабан үҫеш алманы. Быға Әйүптең:

— Сессия көсөргәнешле үтте. Хужалыҡтарҙа эш бармай. Ни Мирхәйҙәровы... Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, тигәндәй... Да... Тирәклегә барып ҡайтмай булмай, — тиеүе сәбәп булды. Камалетдинов ҡатыны аша стенала эленеп торған көҙгөгә күҙ һалды, буғай. Сөнки уның: «Әллә сәс тә еткән инде...» — тигәне ишетелде. Мәликәгә артабан был рәүешле иренә һыйынып тороу әрһеҙлек кеүек күренде. Инде ул да һыуына төштө, артҡа сигенеп, көҙгө аҫтына, стенаға һөйәлде, күңеленә аңғармаҫтан бәрелгән рәнйеүгә яуап итеп:

— Сәсеңдең... биленә еткәнен... Тирәклегә барыр булғас күрҙеңме? — тигән һорау бәреп сыҡты. Ире, ҡуйы, ҡарлуғас ҡанатылай яҙылған ҡаштары аҫтындағы ҡуңыр йөҙлө кешеләрҙә һирәк осрай торған зәпзәңгәр күҙҙәрен ҡыҫа төшөп ҡатынына бер ҡараш ташланы ла, көрһөнөп, өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырҙы:

— Аш ҡой.

— Ҡоям!

— Һүҙең бөттөмө?

— Бөттө! — Артабан тағы низер әйтеп икәү араһындағы мөнәсәбәтте ҡатмарлаштырыуҙан ҡурҡҡан Мәликә, туҙан һөртә торған сепрәген эләктереп, түръяҡҡа атланы.

Иренең ашап бөтөп тәрилкәне ары этkән тауышын ишетеп, Мәликә йәнә алъяkkа сыkты.

— Һиңә әйтәм, — тине ул, мөмкин тиклем үҙен тыныс тоторға тырышып иренең алдына сәй яһап kуя-kуя, — бала эргәһендә кеше, йәғни һин булғанда... Мин Кәкере ауылға барып kайтайым әле...

— Нигә?

— Беренсенән, kарсыkты ризаландырыр кәрәк... Унан һуң... һин нисек уйлайһыңдыр, миңә... ниңәлер... kыҙыбыҙ һөйләшә башлар кеүек... Лоkман Талиповичтың Әбүбәкере менән сағыштырам да...

Ҡыҙының һөйләшмәүендә бары тик үҙен гәйепле һанағандай, Мәликә уйлағанын бына шулай теҙҙе.

— Ә ниңә балнисkа...

— Әйү-ү-үп... — Мәликә инде кейенә башлаған еренән иренә табан боролдо. — Йоkламай интеккәнендә врачтарға әҙме йөрөнөк!..

— Эйе... уныһы шулай. Ярай. Тик kара: кеше белмәһен. Машина... саkырайыммы?

— Юk, юk... Мин үҙем генә. Миңә лә әҙерәк һауала булырға кәрәк тә...

Ҡатыны артынан ишек ябылғас, Әйүп иркен тын алды. Төп яkkа үтеп, Флориданың йоkлап ятkанын kарап тора бирҙе лә, kулына гәзит алып, kәнәфигә сумды. Тик kулдары гәзит юлдарынан йүгерһә лә, йөрәге, танһыk осрашыу көткән күңеле татлы ла, ғазаплы ла хистәр өйөрмәһендә бәүелде. Күҙ алдына Мәҙинәнең йә Мәскәүҙә күргән дәртле, бәхетле йөҙө, йә уның һарайғыр менеп килгәндәге һыны баçты. Ахыры уның муйынынан саk kына аçтараk, иҙеүе башланган ерҙә... түп-түңәрәк кенә kара миңе бар. Ә, бәлки, юkтыр? Битендәгеһен белә Әйүп, ә бына... Әйүп, тороп, тәҙрә эргәһенә килде. Тышта буран, ябалаkлап kар яуа. Был тиклем kарҙы ойоçkота башлаһа... Хужалыkтар кәбәндәрҙе kураларға яkын шылдырҙылармы, юkмы инде...

* * *

Ҡыш етһә, Фәүзиә-Барсынбикә китаптар донъяһына сума. Әлдә уны өләсәһе бәләкәй сағында мөғәллимдәр саkыртып, төрки, фарсы, ғәрәп телдәренә өйрәткән. Тирәклелә мәшәkәтле тормош менән йәшәгәндә күп нәмә иçенән дә сыға башлаған. Мәгәр бала саkта хәтеренә һеңгән тәғлимәт онотолмай икән. Мөғлифә kарсыkkа аптырай ул: ошо саkлы китаптарҙы kайҙан алған, нисек һаkлаған... Китап ситтәрендәге яҙыуҙарға kарағанда, уkымышы ла шәп булған бит уның! Барсынбикәгә уға етергә... Әйткәндәй, китап ситендәге яҙыуҙа ул шундай юлдарҙы ла уkыны: «Туғаным... Аллаһ тәғәләнең рәхмәте киң. Зиһенең үткер, сырағың яkты булһа, мин үткән юлдан үтерһең, күңелеңә бикләнгән аят-сүрәләрҙе, доға-фатихаларҙы үҙеңдән һуң килер kыҙ балаға биреп kалдырырһың...»

Был һүҙҙәр Барсынбикәнең нәгеҙ үҙенә төбәлгән кеүек тә бит! Хәҙер инде Барсынбикә уйҙары менән киләсәккә атлыkмай — уй ебен әкрен-әкрен артkа һүтә. Китап ситендәге ул һүҙҙәрҙең кемгә төбәлгәнен аслан белеү өсөн күпме уй йомғағын һүтер кәрәк, әҙме яҙмыштар, кисерештәр, ғүмерҙәр даръяһын кисер кәрәк...

Әллә ел, әллә кеше kағылыуҙан, kапkа шығырланы.

— Кем йөрөй икән? Эттәр өрмәне. Тағы kайҙалыр олаkты, шәй, былар... — Фәүзиә-Барсынбикә, kатаһын эләктереп, ел асмаһын тип келәһен эләктергән солан ишеген этәрҙе:

— Аһ... Мәликә kыҙым, һинме?!

— Мин, инәй... — Ҡупшы, һылыу ханым kарсыkтың тар ғына яурынынан kосаkланы. — Бына... Киләм әле...

— Киләһең инде, килмәй... Ишекте бәндәгә инмәк-сыkмаk өсөн яратkан Хоҙай...

— Шулайҙыр, күрәһең. — Ҡарсыk йоkа ғына кәүҙәһен урындыk ширлегенә урынлаштырып, доға уkып битен һыйпаны, Мәликә түрбашkа килтергән күстәнәстәрен теҙҙе.

— Аллаһ әкбәр! Һы... Шул саkлы өймәһең... Кем ашай ул хәтлене?

— Ҡыш оҙон бит, инәй… Тышта боҙолмай ул!
— Ҡыш бауыры оҙон инде оҙонлоҡҡа… Йә, сисен, һөйләп ебәр…
Мәликә, һүҙен ниҙән башларға белмәй, ҡаушабыраҡ ҡалды. Һорауҙары күп уның был ҡарсыҡҡа, ләкин ул бит бөтәһен дә белеп-күреп ултырған кеүек.
Бына ҡарсыҡ тамаҡ ҡырҙы, ҡулына янсығын алды, оҙаҡ ҡына итеп тағы ниндәйҙер доға уҡыны, шунан янсыҡтағы йәшкелт йоморо таштарҙы балаҫҡа һибеп ебәрҙе…
— Был ни була, инәй?
— Ноҡот… Күңелемә бер уй килде. Шуны таштар менән тикшерәм…
— Уй?! Минең хаҡтамы?
— Эй балалар… — Күңеленә килгәндәрҙе, ахыры, бер тынала һөйләп бирергә йөрәге етмәне Барсынбикәнең. Әй яҙмыш! Барсынбикә-Фәүзиәгә генә уның иң кәттәһе, иң сетереклеһе яҙған икән тиһәң, уның ҡаршыһында ултырған, йәше ҡырҡҡа ла етмәгән бынау ҡатын ниҙәр генә кисермәгән, ә алда күрәсәге… — Әйҙә әле, ҡыҙым, сәй эсеп алайыҡ. Самауырым ҡайнап сыҡҡан ул, бәләкәй баҫып ҡына ҡуйғанмын. Күргәп ебәрһәм, хәҙер йырлап китер! — Ҡарсыҡ, еңел ҡыбырлап, самауырын соланға алып сыҡты. Мәликә, ни уйларға белмәй, ултырған ерендә таш һын кеүек ҡатты. Бына ошолай ултырһаң да ултырһаң ине. Себерҙәге, ул тыуған ерҙәге, теге таш һындар кеүек. Күккә текләгән дә ҡатҡандар, уларға бит бер ни кәрәк түгел…
Хәҙер тоталар ҙа, кеше маймылдан барлыҡҡа килгән, ти ҙә яҙалар. Мәликә шуға аптырай: әҙәм улай маймылдан яралғас, боронғо һүрәт-һындарҙа ниңә маймылды кәүҙәләндермәнеләр икән? Мәликә йоҡлө сағында ла гел шуны уйланы: ниндәйҙер бер ғиллә менән, ата-бабаларына оҡшап, унан маймыл бәпәй тыуа күрмәһен! Юҡ, маймыл-бәпәй тыуыуын тыуманы, уның ҡарауы ҡурсаҡ кеүек матур бала күпме мәшәҡәт яһаны…

— Ни уйлайһың, ҡыҙым? — Ашъяулыҡҡа батмус ҡуйып, сынаяҡ теҙә башлаған ҡарсыҡтың һорауы телдән ҡалған кеүек ултырған Мәликәне һиҫкәндереп ебәрҙе.
— Мин, инәй… бына… кеше нисек барлыҡҡа килгәнен гел уйлайым. Беҙҙе лаһаң маймылдан барлыҡҡа килгән, тип яҙалар.
— Маймылдан? — Ҡарсыҡ яулыҡ осо менән ауыҙын ҡаплап, кеткелдәп көлдө. — Һы… Гәзит уҡымағас, униһын белмәйем. Шуны ғына әйтмәксемен: сәүит алып килгән күп нәмәне өр-яңынан башларға, өр-яңынан төшөнөргә тура киләсәк. Кеше маймылдан яралғанмы-юҡмы, мәгәр кеше тау ҙа, ағас та, хайуан да, ҡош-ҡорт та булған. Бәндә эсендә шуларҙың барыһы ла бар. Ҡөрьән-Кәримдә бит былай тип яҙылған: «Беҙ һауаға, ергә, тауҙарға үҙебеҙҙең ышанысты тәҡдим итеп ҡараныҡ, ләкин улар уны ҡабул итергә баҙнат итмәнеләр, ә бына кеше ҡабул ҡылды».
— Шулай икән дә… Әйүп миңә гел уҡы ти ҙә, бигерәк аҙ беләм шул. Беҙҙең яҡтарҙа ла һинең кеүек күрәҙәселәр була торғайны.
Барсынбикә көлөмһөрәне:
— Улар күп ул… Эс, ҡыҙым, күстәнәсен ашаған кеше оҙон ғүмерле була, ти торғайны минең оләсәй…
— Рәхмәт, инәй. Мин бында япаяңғыҙ кеүекмен. Һинең менән һөйләшһәм, рәхәт булып китә.
— Бик алыҫтан икәнһең шул, балаҡайым. Ә бит һиңә шул юлды яңынан үтергә тура киләсәк…
— Миңә?! Яңынан?! Ләкин минең унда бер кемем дә ҡалманы! — Ҡаушаған Мәликә ҡарсыҡтың төндәй ҡара күҙҙәренә текәлде. — Ни өсөн…
— Эс сәйеңде, һыуытма… Сәйнүккә тынысландыра торған үлән һалғанмын…
Ҡапыл ғына битарафҡа әйләнгән Мәликә күҙҙәрен әбейҙән алды, ҡаршыһындағы самауырға ҡараны.
— Тынысландым инде. Әйт, инәй, һөйлә… Флоридам… балам хаҡына мин…

— Күрәсәген күрмәй тороп, бәндә гүргә инмәй, ҡыҙым. Ә һинең әле...

Ялтыратып йышылған еҙ самауыр ҡорһағында Мәликә үҙенең оҙонсараҡ күренгән йөҙөнә, оло сырай алған күҙҙәренә ҡарап, ҡарсыҡтың кисереүгә еңелдән булмаҫҡа оҡшаған хәбәрен эске бер тулҡынланыу, ҡурҡыу менән тыңларға әҙерләнде...

* * *

Күктең төбө тишелгәнме ни — ҡар яуа ла яуа. Балаһын имеҙеп Маһинурға тотторғас, Мәҙинә йәнә һырмаһына үрелде.

— Әллә тағы китәһең? — Киске һауынға көндәгенән иртәрәк ҡуҙғалырға торған Мәҙинә үҙенә инәһенең аптырабыраҡ ҡарауын тойҙо.

— Барам әле, күңел тыныс түгел. Тракторҙарҙы урманға ебәреп бөттөк тип, бесән тарттырмаҫҡа итәләр.

— Уй алла-а-а... — Маһинур гәмле ҡарашын Мәҙинәнән тәҙрәгә күсерҙе. — Бесәнегеҙ бөтһә, анау тикте малды ни ашатып торорһоғоҙ икән?

— Ярай, инәй... Оҙаҡлаһам, бутҡа ашатырһың... Мал ҡарарға ла сыға алмай ултырырһың микән инде...

Фермаға килеп етмәҫ элек үк таныны Мәҙинә таналарын. Башҡа һыйырҙар һауынсыларҙы ялан кәртәлә ҡайһыһы ҡайҙа тороп көйөш алһа, шунда ҡаршылай, ә былар һайғауҙы емерә яҙып Мәҙинә күренгәнде көтәләр. Мәҙинәнең аҡ мамыҡ шәле күренеүгә була, кемуҙарҙан баҡырышып, ҡапҡаға һерлегешә малҡайҙар. Ә инде Бөйрәкәй Мәҙинәнең битен ҡытыршы теле менән ялап алырға уңайы сыҡҡанын һағалай.

Таналарға үҙе лә эҫенде Мәҙинә. Мәгәр был эҫенешеү шыма ғына булманы. Тана өйрәтергә тимә бер һауынсы ризалашып бармаһа ла, башҡа эш тәҡдим итмәгәстәре, Мәҙинә риза булды ла ҡуйҙы. Төркөмдө ул йәйләүгә сығыр алдынан ғына туплап бөттө. Бер-икеһенән ныҡ ҡына тибелһә лә, ҡурала саҡта әллә ни бирешмәгәйне. Таналар уның күҙенә утты йәйләүгә сыҡҡас күрһәтә башланы! Әле битен ялап торған Бөйрәкәй ниҙәр генә ҡыланманы. Үҙҙәренән алып сыҡҡан Билдәш тоҡомо Бөйрәкәй... Хатта быға тиклем иң йыуаш тигән таналары ла себен-серәкәйгә сыҙамһыҙ булып сыҡты.

Бөйрәкәйҙе һауыуҙы ул һуңға ҡалдырҙы. Көтөүҙән үҙе иң алда килә лә күҙенең ҡыры менән генә Мәҙинәнең һәр хәрәкәтен күҙәтеп тора.

«Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй, ир-егеткәй менән ат башы», — тип йырҙа йырланһа ла, Мәҙинә ул юлдарҙың дөрөҫлөгөн һыйыр малы менән — Бөйрәкәй менән — һынаны. Үҙенең ҡабатланмаҫ холҡо менән тыуған тананан һыйыр яһаған саҡтары мәңге онотмаҫлыҡ булып хәтеренә уйылды. Әле лә ул таналарҙы индереп, алдарына тоҙ һалып бәйләгәс тә Бөйрәкәйҙе һауырға ултырҙы. Һөтө күп уның, шуға түҙемһеҙ. Үҙенә айырым ҡараш, наҙ талап итә. Наҙлы һыйыр Бөйрәкәй, иркә һыйыр. Ә йәйләүҙә... Һәүкәштең ҡамыштай имсәктәренән оҙон йыр кеүек һуҙылып аҡ һөт ағылды, Мәҙинә йөрәген берсә ҡыҫылырға, берсә шатлыҡтан тулҡынланырға мәжбүр иткән йәйләү хәтирәләренә сумды.

Башҡалар һауындарын күптән бөтә. Ҡаҙан аҫтарына ут яғып, аҡланды эскелтем төтөн еҫенә тултырып киске аш хәстәрләй башлайҙар.

Башҡа һауынсылар ҙа килеп ҡарай ярҙамға — яҡын ебәрәме ни уларҙы таналар! Ә һөттәре һәйбәт үҙҙәренең. Тана ғына булһалар ҙа Мәҙинә фермала икенсе урында килә. Һыйыр ҡорона тулып алһалар, әллә кемдәрҙе йыҡоһонан яҙҙыра инде былар.

Ҡайһылары яртылаш һауҙырҙы, ҡайһыһы ҡалай — сират Бөйрәкәйгә етте.

— Һәүкәшкәй!.. — Күп һыйыр үҙен һауғанды көтөп арып, ятаҡтай башлай. Ә был тора. Тыштан ҡарағанда шундай күндәм, ихлас күренгән була. Хатта, Мәҙинә яҡынлағас,

быҙауын күргәндәй, ызылдап уҡ ебәрә.
— Э-э-й һылыуҡай... Бөйрәкәй... — Мәҙинә унының муйынын һыйпай. Үңәсен һуҙып тора был рәхәтләнеп. Элек булһа, һыйпатыр ине, һыйпатмай. Мәҙинә уның ҡабырғаларынан, осаһынан һөйөп, әкренләп елененә күсте. Тулышҡан имсәктәренә үрелде. Шунда ел төтөндө икенсе йүнәлешкә борҙо. Танаҡайҙы ен алмаштырҙымы ни — шартлатҡансы күнәкте тибеп осорҙо.
— Эй малҡай... Шул тиклем сабырһыҙ булмасы!
Мәҙинәнең таналары менән ҡара тиргә төшкәнен көтөүселәр әлегә ситтән генә күҙәтә. Баштуҡ аяғын бәйләйек тинеләр, Мәҙинә, һыйырҙы һынап ҡарамай тороп, холҡон боҙмайыҡ тип, үҙе риза булмағайны.
Икенсегә янына килде Мәҙинә. Төтөнлөктө инде өс яҡтан һалдылар.
— Һәүкәшкәй... Үҙеңә ҡыйын бит, иҫәркәй!
Эйе, елене һыҙлай Бөйрәкәйҙең. Һөт тишектәре әле киңәймәгән, үҙенән-үҙе саптыра ла алмай, ботон алмаш-тилмәш баҫып, күҙенең ҡыры менән Мәҙинәгә мөлдөрәп-мөлдөрәп ҡарай меҫкенкәй.
Мәҙинә йәнә сүгәләне. Ике ҡуллап имсәктәргә йәбеште. Шәп кенә һауғанда... Йә хоҙа! Ләкин күп тә үтмәне, танаҡай һиҫкәнде, ҡойроғо менән Мәҙинәнең битенә тондорҙо.
— Тик кенә тор! — Бынынһын ҡатыраҡ әйтеп ҡараны Мәҙинә.
Юҡ, торманы, биҙрәгә елле генә итеп типте лә, ары атланы.
— Алдына ашарға һалып ҡарарға ине. — Көтөүселәр белә инде малды нимә менән әүрәтергә.
— Ә нимә һалырға? Бер-ике бешерерҙәй генә оном бар.
— Эйе, эйе, унан һуң ул көн дә шуны там итәсәк!
— Һауа алмайһың һин быны! Күп таналарҙы һауынсылар йәйләүгә сыҡҡас ташлай.
— Нисек ташлайым ти мин уны? — Мәҙинә, аптырап, бер көтөүселәргә, бер үҙенән ярайһы уҡ ситкә киткән Бөйрәкәйенә ҡараны.
— Нисек тип, иткә тапшырт. Һауҙырмағас, үҙенә үпкәләһен.
— Юҡ, минең иң һөтлө һыйырым буласаҡ ул!
— Әләйһәң, үҙең маташтыр, беҙ һинең танаң тип, төнө буйы йөрөй алмайбыҙ!
— Эт ыҙаһы менән өйрәтеп алған танамды һөт күбәйгәс кенә ташлай торғаным юҡ минең дә!
Ул кисте Бөйрәкәй һауҙырманы. Арып көйөшкә ятҡан һыйырҙар көтөүен уратып йөрөнө лә йөрөнө. Мәҙинә лә хәлдән тайҙы. Ә таңдан торорға. Шунһыҙ көтөү ҡуҙғалыуға өлгөрмәйәсәк.
Ҡара таңдан торһа ла, Мәҙинә һыйырҙарын иң һуңғы булып һауып бөттө. Унда ла илле алла менән. Таналар һөттәрен шунда ла биреп бөтөрмәне. Ҡайһыларын тышаныላр, ҡайһыларының башын бәйләнеләр. Ә Бөйрәкәй көтөүгә яҡын юламай, ситтәрәк тора. Елене ҡыҙарып шешкән, үҙенең күҙҙәренән йәш субырлай. Юҡҡа сыға бит танаҡай.
Мәҙинә кеҫәһенән бер телем икмәк сығарҙы:
— Бөйрәкәй, мә, ҡара әле был яҡҡа!
Ҡарап та ҡуймай, йәнәһе, үпкәләгән.
Эргәлә буталып ферма мөдире Саяф йөрөй:
— Бәйләйек, егеттәр!
— Ырғый бит ул!
— Алғыларын да, артҡы аяҡтарын да тышап, муйынын шаҡарып бәйләһәң, ҡайҙа барыр тиһең?
— Шунан, гел улайтып бәйләп буламы?
— Әйҙә үҙең бәйлә!
Ҡото алынды Мәҙинәнең: харап була һыйыр. Торһа, ул ошо көйөнсә тороп китәсәк, тормаһа...
— Һәүкәшкәй... — Мәҙинә килеп етеүгә, Бөйрәкәй бер-ике аҙым алға атлай биреп ҡуйҙы. Икмәк еҫе тәьҫир иттеме — ызылданы. — Мә әпәкәй, тик тор инде Бөйрәкәй... Харап булаһың бит, балаҡай!..
Тана икмәкте ялманы. Шул арала Мәҙинә етеҙ генә ҡыбырлап һыйыр аҫтына сүгәләне.

— Атаҡай! Еленгенәндең шешеүе... — Унның тотоноуы елененең һыҙлауын көсәйттеме — ни уйларға ла өлгөрмәне — ҡоростай тояҡтың күкрәгенә йән көскә бәрелеүен тойҙо. Уттар осҡон сәсрәтеп балҡынылар ҙа һүнделәр, донъя ҡараңғылыҡҡа сумды...

Иҫенә килгәндә Мәҙинә ҡыуышта ята ине. Эргәһенә һауынсылар йыйылған. Мәҙинә тороп ултырырға итте — күкрәге ирек бирмәне, йүткергәйне — тамағынан ҡан сәсрәне.

— Ни булды миңә? Бөйрәкәй һауылдымы?

— Ҡайҙан һауылһын... Һөтө менән китә инде малҡай. Ҡайғырма: тана өйрәткәндә ундай хәлдәр була ул... — Оло һауынсы Шәмсинур апай ҡулын Мәҙинәнең маңлайына ҡуйҙы. — Ҡуҙғалма инде, ят тыныс ҡына.

— Ул бит миңә... өйрәнгәйне...

— Себен аҡыл таптырмай... Ҡурала һауыу менән яланда һауыу берме? Хатта һинең Сыбарҡайың да кистән ике имсәген һауҙырмай китте...

Мәҙинәнең күҙенә йәш эркелде:

— Бөйрәкәй... — Шул малҡайҙың йылы ҡабырғаһына маңлайын терәп, ҡайғыларын һөйләһә... эсе бушап ҡалғандай була ине...

— Бынау үлән һыуын эс әле. — Шәмсинур Мәҙинәнең башын тотоп ҡалҡытты, күкрәкте үткер бысаҡ менән сәнскәндәй ауыртыу телеп үтте.

— Эс, эс... Бөткәнсе эс. — Эсте Мәҙинә, унан уҡшый башланы.

— Тас, тас килтерең! — Һары еҙ тасҡа Мәҙинә ауыҙынан киҫәк-киҫәк ҡара ҡан эркелә башланы.

— Ҡоҫоп бөтөр, күкрәгеңә сир уҡмашып ҡалмаһын...

Шунан еңелерәк булып ҡалды. Шәмсинур апай мендәрен төҙәткеләп ятҡырҙы:

— Инде тик кенә ят. Мейең төшкән. Бәләкәс тора биргәс ултыртырмын. Күкрәгеңде лә һылармын. Ошо үләнде өҙмәй эс. Йәшһең, йүнәлерһең...

Ҡыуыштағылар сыҡты. Ҡыуыш һайғауҙарына ҡырҡылған ағастарҙа ҡурай башлаған япраҡтарға ҡарап ятты Мәҙинә. Йәшләй ҡырҡылып, йәшел көйө кипкән япраҡтар... Йәшләй нужа баҫһа, йәшел дә генә көйө кибәһең икән шулай.

Күҙҙәр, һуңғы арала йоҡо бите күрмәүҙән ҡыҙарып елһенә башлаған күҙҙәр, йомола башланы... Бер туйғансы ял бирергә ине. Бөгөн киске һауынды, моғайын, Шәмсинур апай һауыр. Ҡыбырламай ғына ятһаң, артыҡ һыҙландырмай ҙа кеүек...

Инде йоҡоға киттем тигәндә, ҡыуыш алдында өҙөлдәп баҡырған тауыш ишетелде. Баҡырыу йәнә ҡабатланды. Был ябай һыйыр баҡырыуы түгел, бәлки мал телендә әйтелгән йән ғазабы ине.

— Ы-ы-һ... — Тороп ултырҙым тигәндә, күкрәге сәнсте. — Бөйрәкәй...

Һыйыр тағы эс-бауырынан өҙөлөп үкһене... Мәҙинә, шыуышып барып, ҡыуыш ишегенә ҡапланған сепрәкте күтәрҙе:

— Һин?! — Ҡыуышҡа һонолоп башын тығып, Бөйрәкәй Мәҙинәнең сәсенән яланы. — Эй сабый... Шәмсинур апай, күнәк менән ултырғыс килтерсе.

— Ай алла-а-а, Мәҙинә. Тәки торғоҙа бит был һине...

— Тана юҡҡа сыға...

Ыңғыраша-ыңғыраша, ауыртыуын йөрәгенә төйнәп, Мәҙинә урынынан торҙо.

— Ы-ы-һ... Елендән һөт килмәй, имсәктәр тарбайып шешкән. Сепрәк йылытып килтер, Шәмсинур апай, йылы һыу әҙерлә...

Йылы сепрәк баҫып, йылымыс һыу менән йыуғас, нәҙек кенә еп булып һөт килә башланы. Бөйрәкәйҙең күҙенән дә, Мәҙинәнең күҙенән дә һыҙланыу һығып сығарған йәштәр сөбөрҙәй...

Ҡоротҡансы һауып, имсәктәрен майлағас, Мәҙинә ҡыуышына инеп ауҙы. Ҡоҫҡо килә, баш әйләнә, күҙ алдында һуҡыр себендәй мыжғып ҡара төрткөләр өйөрөлә.

Тышта ла тыныс түгел. Ишетеп ята — таналар Шәмсинурға баш бирмәй. Тегеһе һүгә генә малҡайҙарҙы, әҙәм телен аңлаһалар, ғәрлектәренән ятып үлерҙәр ине, биллаһи.

Көтөүселәр ҙә арманһыҙ булдылар, шикелле. Әлдән-әле сыбыртҡы шыйлағаны, өс-дүрт ҡатлы итеп һүгенгәндәре киске һауала әллә ҡайҙарға тарала.

Төнләтеп ҡыуышҡа ингән Шәмсинур ашап та тормаҫтан түшәккә ауҙы.

Иртәнсәк Мәҙинәне тағы һыйыр мөңрәүе уятты.

— Бөйрәкәй! — Исемен ишетеүгә, тегеһе ҡыуаныстан ярһып баҡырып ебәрҙе.

Шәмсинур икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты.

— Кәрәкле кишер япрағы, әллә кем көтә һине...

Мәҙинә торҙо. Тышҡа сыҡһа, аптырауынан ултыра төштө: барлыҡ таналары Бөйрәкәй артынан килеп, әҙерәйешеп ҡыуышҡа ҡарап торалар.

— Эй малҡайҙар... — Мәҙинәнең күҙенән йәш атылды. Ҡултыҡ аҫтына йылы бер нәмә төртөлгәнгә әйләнеп ҡараһа — Бөйрәкәй икән. — Малҡай... — Мәҙинә Бөйрәкәйҙең күҙҙәренән үпте, яңаҡтарынан һөйөп яратты. — Бөйрәкәйем минең, иҫәрем...

Мәҙинә күпме тырышһа ла Бөйрәкәйҙең бер имсәген эшкиндерә алманы: танаҡай өс имсәкле булып ҡалды. Шул көйө лә әле ул ике-өс тананың һөтөн бер үҙе бирә. Эйе... Бөйрәкәй бер имсәктән, Мәҙинә тауыштан яҙҙы. Шунан бирле йырлағаны юҡ уның. Йырларға көсәнһә, тын юлынан ҡан китә. Маһинур инәһе үләндәр, төнәтмәләр эсерә, үтеп китер, тигән була. Күңеле болоҡһоһа, әрнеһә-һыҙланһа, эсендәге юшҡынын Мәҙинә йыр менән сығарыр ине. Хәҙер ҡыйын. Күңелен бары эш менән баҫа...

Һыйырҙарын һауып бөткәс, Мәҙинә, ферма мөдирен күрергә була, «Ҡыҙыл мөйөш»кә инде. Саяфтың кәйефе юҡ микән, ауыҙындағы тәмәкеһен бер уңға, бер һулға күсергеләп салыш-солош ҡарап ултыра.

— Мәҙинә, у ништәп Сыбарҡайың һөтөн кәметкән?

— Мин уны Алаҡай эргәһенә бәйләгәйнем. Тик торғанда һөтө ҡайта башланы, холҡо ла үҙгәрҙе. Баҡһаң, иҫемә төштө: ул бит быҙаулағансы Бөйрәкәй эргәһендә торҙо! Күрәһең, Алаҡай менән биреһе килешмәне... Әле рәтләнде. Мин, Саяф ағай, әле бесәнлеккә күҙ һалдым. Запас уҙа барһа ике көнгә етерлек...

— Шунан?..

— Шунан — шул. — Мәҙинәне мөдирҙең тауышындағы сәнскеләр баҙата төштө. — Буран сыҡһа...

— Мәҙинә, һин бында кем булып эштәйһең?

— Нисек кем? Һауынсы...

— Шулай булғас, бар, ана, таналарыңды бел. Ә малға запас ҡайғыртыу...

— Һеҙ ҡайғырта башлағанда һуң буласаҡ!

— Һиңә нимә кәрәк?

Мәҙинәгә сығып китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы.

Ә йөрәк һиҙә. Теге төшөндә күргән «һау, һау» тигән ауаз һаман тынмай, торған һайын ул тәрәндәнерәк сыға. Хәҙер ул «һау-һау» тип түгел, бәлки «һу-һу» булып олой. Әгәр ҙә Мәҙинә Мирхәйҙәровҡа барһа? Ул да Саяф кеүек ҡыуып сығарыр микән? Ә бәлки Мәҙинә ысынлап та үҙенә күпте алалыр? Ә бәлки ул яңылышалыр? Етәкселәр бит бөтәһе лә ауыл кешеләре, малсылыҡта ла беренсе йыл эшләмәйҙәр. Улар бит тып-тыныс...

Шундай уйҙары менән Мәҙинә идараға барырға ынтылған еренән кире боролдо. Ҡайтып, шиктәрен Маһинур инәһенә һөйләгәс, униһы ла:

— Ауыртмаған башыңа таяҡ эҙләп йөрөйһөң, — тип орошҡан кеүек булғас, бөтөнләй тынысланды, Дауытын алдына алып, һөткә сыланған иҙеүен асып, тулышҡан күкрәген сығарҙы.

* * *

Таулылағы йәненә яҡын кешелә йәшәй башлағас, Күкбүре иркен тын алды. Ҡарабашҡа йәне көйөп китһә лә, түҙә. Был түҙемгә йөнтәҫ ҡара арлан үҙе лә сәбәпсе: әрһеҙ түгел, Күкбүрегә нимә кәрәк, ә нимә кәрәкмәй икәнен әллә ҡайҙан һиҙә. Күкбүре үҙе яҡынламаһа, ылығып бармай. Ҡарабаш Күкбүренең үҙенән бер башҡа юғары булыуын — урман кейеге икәнен дә иҫенән сығармай. Таулы ситендәге урмандарҙа улар икәү бергә һунар итеп тә алғылай. Төлкө, сел, ҡуян тотһалар бик шәп, һайыҫҡан ише менән хушһынырға тура килгән саҡтары ла булғылай. Табышҡа бер ҡасан да Ҡарабаш, ир затынанмын тип һауаланып, беренсе ташланмай... Табыштың күп өлөшө уның көсө булған хәлдә лә Күкбүрене алдан ҡуя. Уға юл бирә. Шуға ла һыйышалар. Ә инде Күкбүре алыҫҡараҡ юл тотһа, Ҡарабашҡа: «Етте һиңә!» тип теш күрһәтеүе була, тегеһе тороп ҡала.

Әле лә, кискә табан, Ер менән Күк бергә ҡушылып үкереп ебәреүгә, Күкбүре тынысһыҙланды. Ауыл ситенә сығып, убаға баҫып, буран тауышына оҡшатып олоно ла эре-эре аҙымдар менән алға ынтылды.

Асылың ниндәй — булмышың шундай инде. Көс тә, ғәйрәт тә, болоҡһоу ҙа бүрегә тәбиғәттән күскән. Ана ул, эсендәге шул ярһыуҙы еңә алмайса, тиреҫтән өргән ел-дауылға ҡаршы атылды. Бына тәрән үҙәк. Буран әле генә сабып уҙған тоҡомдаштары еҫен килтереп бәрҙе моронона. Аҡмаңлай өйөрө был. Атаһы Уҙаманға оҡшап көслө, таҫыллы зат. Ләкин әсәләрен улар үҙ итмәне: Күкбүре бит яңғыҙ ҡалған кәнтәй. Етмәһә, үҙенән әҙәм, торлаҡ һәм ытырғандырғыс эт еҫе килә. Күкбүре һыҙланды, уларҙың эҙенә ҡарап, көтөүҙең ҙурлығын, йәшен, көсөн самаланы. Үҙенең шулар араһында була алмауына йәне әсене, эсе өҙөлдө, сараһыҙлыҡтан ултырып бер талай олоп алды.

Әммә ул бөгөн Тирәклегә сыҡҡан. Шунда бер барғанында моронона таныш, үтә лә яҡын еҫ бәрелде. Әлбиттә, элек был еҫ ҡырҡыуыраҡ, әсерәк ине. Уға тиреҫ, ат, дегет, ҡайыш, башҡа әллә нисә төрлө аңҡыш һәм әле үҙе йәшәгән яҡын кешенең еҫе ҡушылғайны. Хәҙер унда күп еҫтәр мөсһөҙләнгән, ләкин тик үҙенән генә сыға торған еҫ тороп ҡалған. Күкбүрелә буран ана шул кешене барып табыу хисен көсәйтте. Табырға тейеш ул шул Еҫте! Сынйырға бәйләһә лә, бойороҡтарын тыңларға өйрәтһә лә, шул Еҫ уны асыҡтырманы, өшөтмәне. Көсөк сағында атына эйәреп икенсе ауылға барһа, арбаһына алды, ауыл эттәренән талатманы. Шул Еҫте ҡабат тапһа, бәлки, йәне йәһәннәмдәй тулау-ярһыуҙан туҡтар ине Күкбүренең.

Буран нисек ҡапыл башланһа, елдең тиҙлеге лә шул тиклем үк йылдам артты. Күкбүрегә ул ҡурҡыныс түгел, ә юлда бына бер әҙәм заты күренмәй. Бөтәһе лә тынған, бөтәһе лә, Тәбиғәт тыуҙырған ғәрәсәт ҡаршыһында көсһөҙлөгөн танып, шымып ҡалған. Эйе! Эйе! Кеше тәбиғәт көсө алдында көсһөҙ! Күкбүре генә тантана итә, олой, ярһый, саба, булмышының, яралмышының, көс-ҡеүәтенең тәбиғәт менән айырылғыһыҙ булыуын аңлауҙан ул аҡылдан шашыр сиктә рәхәтлек кисерә!

Ана ауыл, буранда ул тағы ла тәпәшәйеп, шиңеп, шымып ҡалған өйҙәре менән аңра ғына, йомшаҡ ҡына айыу балаһын хәтерләтә. Ферма яғынан буран уның танауына үткер еҫтәр килтереп бәрҙе, улар араһында ҡан-һүл еҫе лә бар. Йән үрсем биргәндә сыға торған был еҫ Күкбүрегә яҡшы таныш. Үҙе көсөктәрен тапҡанда ла шундай еҫ таралғайны. Был танһыҡ, тереклектең тере шишмәһенең еҫен татыуҙан кәнтәй күҙҙәренә йәш эркелде. Бурандың моронона ыуыҙ тәмен килтереп еткереүе уның йән әрнеүен тағы ла көсәйтте, бөтә һаҡлыҡ сараларын онотоп, үрсеүгә ынтылыш тәкәтен еңә алмайынса йән асыуына олоп ебәргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды...

* * *

Күрәҙәсе ҡарсыҡҡа барып ҡайтҡаны бирле Мәликә үҙенә урын таба алмай. Эшләйем тиһә, ҡулынан әйбере төшә, һөйләйем тиһә, тамағына төйөр тығыла. Ҡарсыҡҡа ышанмаҫ ине — Мәликәнең бөтә үткәнен дөрөҫ тойомлап һөйләп бирҙе. Күп тә әйтмәне ул, мәгәр Мәликә тормошоноң ҡара ятыуҙарын прожектор утына тотҡандай сумырып-сумырып яҡтыртып сыҡты:

— Баландың бөтөнләй һөйләшмәү ҡурҡынысы бар...

— Ах, инәй... — ни әйтергә белмәгән Мәликә башын тағы түбәнерәк эйҙе.

— Мин уны үткәндә... үҙен күргәс үк аңланым. Тик... дауаһы был тирәлә булмағас, өндәшмәй торорға булдым.

— Дауаһы?! Тимәк... — күҙҙәрендә өмөт сатҡыһы уянған Мәликә, турайып, ҡарсыҡтың ауыҙынан тағы ниндәй хәбәр сығырын көттө. Ҡарсыҡ ашыҡманы, сәйе менән тамаҡ ебеткеләп, күҙен алыҫҡа текләп ултыра бирҙе. Әңер ҡараңғылығында аҡһыл, сырыштары юҡ һымаҡ күренгән битендә ҡап-ҡара ҙур күҙҙәре айырым-асыҡ яҡтыра. Мәликә ошоға оҡшаш муйыл ҡара күҙҙәрҙе тағы ҡайҙалыр күргәндәй. Был тиклем дә ҡуйы ҡара күҙҙәр тормошта һирәк осрай.

— Үткән тормошоң еңел булмаған. Бик яҡын кешеңә күңелеңдә ҡаты рәнйеш һаҡлайһың... Бөтә булған бәләләреңде унан күрәһең... Тыуған йортоңдо ташлап алыҫ сәфәргә юлланыуың да шул кеше арҡаһында булған. Хата юлда йөрөүеңдең башы шунда. Ырыу ярыуың да шунда башланған.

Күҙенән йәштәре субырлап ҡойолған Мәликә үкһеп артындағы мендәргә ауҙы:

— Нишләргә миңә, инәй?!

— Башҡа һиңә бер ни ҙә әйтмәйем. Ирең килһен минең янға!

— Иремә... һин ошоларҙы һөйләмәксеһеңме?

— Нигә мин ireңә быларҙы һөйләргә тейеш?!

— Ә уны...

— Күрергә кәрәк! — Ҡарсыҡ, кинәт бер ҡарарға килгәндәй, яулығын эйәк аҫтына ҡымтып бәйләне. — Күп нәмәне тик ул ғына хәл итә ала!

— Флориданың... төҙәлеүен дәме?!

— Эйе, уны ла...

Әле бөгөн Әйүп ҡайтмаясаҡ. Өфөгә киткән. Ҡыҙы сығырынан сығып ҡоторған буран тауышына ойоп, иҙерәп йоҡлай. Шул тиклем ҡоторған буранды Мәликә Себерҙең үҙендә лә күргәне булманы. Бына ҡайҙа ул афәт! Эргәһендә мышнап ятҡан ҡыҙы булмаһа, Мәликә, ҡурҡыуына ирек биреп, йоҡларға күршеләренә тайған булыр ине, моғайын. Ә уға был хәлендә буран олоуын, уның бихисап кейек-януар ауаздары сығарып, ҡыйыҡ эсенә, тәҙрә ҡапҡастары араһына, мөрйәгә инеп тулағанын тыңлай-тыңлай бауырына һары һауҙырған алыҫ хәтирәләренә бирелеүҙән башҡа һис бер әмәл юҡ.

Үҙенең әсәһен хәтерләмәй ул. Түтәйҙәренең һөйләүенә ҡарағанда, Ғәйшә исемле ул ҡатын Мәликә тыуған саҡта вафат булған. Атаһы, Абдрахман приказчик, йәшләй яратып өйләнгән ҡатынының үлеменә бик ҡайғырған, үлемдең сәбәпсеһе Мәликә булғас, яңы тыуған сабыйҙың йөҙөнә бер ҡарап та ҡуймаҫтан, балаһыҙ интеккән ҡайынбикәһенә: «Ите лә, һөйәге лә һиңә булһын!» — тип сабыйҙы тотторап ебәрә. Камила түтәйенең үҙен ҡаҡҡанын-һуҡҡанын хәтерләмәй Мәликә. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡаҡманы ла, артыҡ иркәләтмәне лә. Туш йылғаһы буйында ултырған Ҡыҙылҡаш исемле ҙур ғына Себер ауылында лавка, ҡунаҡхана тотоп торған был ханымдың тәүге хәсрәте эш булһа, икенсеһе үҙенән күпкә йәш, сибәр, типтерергә яратҡан иренән күҙ яҙлыҡтырмау булды. Ун йәшкәме еткәс, Мәликә ауыл мәктәбенә уҡырға төштө. Икмәк-тоҙлоҡ уҡырға, яҙырға, һанарға өйрәнгәс, Камила түтәйе уға мәктәпкә барыуҙы тыйҙы. Көнө буйы ҡунаҡхана керҙәрен, ҡашығаяҡ йыуыуҙан тишелгән бар-

маҡтары сәңкеп һыҙлауын баҫа алмайынса йоҡоға китеп өлгөрмәй — таң беленә. Таң беленеү менән күсер Мәликә ятҡан бүлмәнең тәҙрәһен ҡаға:

— Ҡыҙыҡай, тор! Ут яҡ ҡаҙан аҫтына! Һыу килтерҙем, мискәне бушат!

Мәликә тора, өйрәнелгән хәрәкәт менән көндәлек, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек йорт эштәренә сума. Камила түтәйендәге тормош тағы шулай күпме дауам итер ине, мәгәр үҙенең ун биш йәшендә тиҫтерҙәренән шөйлә айырылып торған буйсан, текә янбашлы, ҡалҡыу түшле, йоморо беләкле, түңәрәк аҡ йөҙлө ҡыҙға икенсе енес кешеләре тарафынан иғтибар көсәйә башланы. Шулар араһында иң әрһеҙе, иң тишә ҡарағаны Камила түтәйенең ире Шафиҡ еҙнәһе булып сыҡты. Башта уның был ҡылығын ҡыҙыҡай еҙнәһенең уны башҡаларҙан ҡыҙғаныуы, ҡурсыуы итеп ҡабул итте. Уның Мәликә эргәһендә сөсөләнеүе бер саҡ Мәликә һалҡын тейҙереп түшәктә ятҡанында эргәһенә яҡын уҡ килеп, арҡаһынан тапап:

— Имсәктәрең тығыҙ,
Битекәйең ҡыҙыл,
Сирләп кенә ятаһыңмы,
Мәликәкәй ҡыҙым, — тип һамаҡлауға барып олғашты. Тәне эҫелеһыуыҡлы булған Мәликә уның ҡулын алып ташланы, артҡа шыуып, стенаға һырыҡты:

— Яҡын килһәң, абыстайға әйтәм!

— Түтәң төнһөҙ ҡайтмаясаҡ, йортта һин дә мин. — Күҙе майланған, ауыҙынан араҡы, һарымһаҡ еҫе аңҡып торған Шафиҡ имгәкләп Мәликәгә йылышты. — Мин һиңә бер насарлыҡ та... Икебеҙгә лә һәйбәт буласаҡ... Һин бит әле яратышыуҙың тәмен белмәйһең... Мин һине бәхетле итәсәкмен!

Үҙ-үҙен белгәндән бирле Шафиҡ еҙнәһен атай урынына күргән Мәликә баҙаны. Буй-һынға ҙур ғына күренһә лә аҡылы менән сабыйлыҡтан сыҡмаған булмышы үҙенә ниндәйҙер ҡурҡыныс, насар, ахыры йүнле булмаҫтай бәлә янауын тойҙо.

— Эй абый... Минең һиңә ни зыяным тейҙе? Улай булғас, ҡайтарығыҙ мине этҡәмә!

— Донъяла бар тип белә ти һине этҡәң! Ха-ха! Бер килеп хәлеңде белмәне! Бөлгән инде этҡәйең! Ә бөлгән урыҫ — эсеп үлгән.

Бер ҡатлы ҡыҙыҡайҙың үҙенән әҙәмсә ярлыҡау, аяу һорауы эҫә-эҫә, ҡатын-ҡыҙ менән самаһыҙ шаяра торғас хайуанға, аҙғынға әйләнгән Шафиҡты оторо шаштырҙы:

— Мин һинең хакимың! Мин генә һине ярата ла...

Ирененә Шафиҡтың һаҫыҡ ауыҙы терәлеүҙән былай ҙа ауырып ултырған Мәликә уҡшый башланы.

— Кит... абый... Уф... — Күңеле болғаныуп уҡшыған Мәликә йөҙтүбән йығылды, уның артынса ҡалҡынған Шафиҡ елпеүенән етеле шәм һүнде. Ауырыуҙан, уҡшып ҡоҫоуҙан баҙап-хәлһерәп ҡалған Мәликә артыҡ ҡаршылыҡ та күрһәтә алмаҫтан үҙенән өҫ тапҡырға оло кешенең һөйәркәһенә әүерелде был кистә.

Ҡулынан лавкалары, улар менән хеҙмәтселәре, боло китеп бөтөп барған, шуға күрә лә көндән-көн ярһыуыраҡҡа әйләнгән Камила түтәйҙең осло күҙенән иртән иртүк үҙенә һылтаҡлай-сатанлай сәй килтергән ҡыҙыҡайҙың күҙ төбөндәге зәңгәр түлкындар ситтә ҡалманы, әлбиттә. Өҫтәүенә, ҡыҙыҡайҙың йөҙө илағанға оҡшаған...

— Ҡабаҡтарың шешенгән. Илаҡың әллә? — тине ул ғәҙәттәге тыныслығын һаҡларға тырышып.

Мәликәнең шул саҡ кис менән ниҙәр булғанын түкмәй-сәсмәй һөйләп биргеһе, түтәйенең алдына ятып илағыһы килде. Әммә шул саҡ ҡолаҡ төбөндә түтәйенең уҫал ыҫылдауы ишетелде:

— Етем быҙау аҫыраһаң, ауыҙморонон май булыр, етем бала аҫыраһаң, ауыҙ-морононан ҡан булыр, тигәндәй, һин, ҡыҙыҡай, йөҙөмә оятсылыҡ килтереп ҡара! Камила абыстайыңдың күңеле киң булһа ла, фарманы ҡыҫҡа! Мин һине, ҡыҙыҡай, үҙем ҡарап үҫтергән бала тип аяп тормам! Төшөндөң?!

Ыуыҙ ғына йән өҫтөнә таштай яуған ана шул һүҙҙәр бөтәһен дә хәл итте: Мәликә иренен нисек тешләгән булһа, абыстайҙың йоҡо бүлмәһенән шул килеш сығып китте.

Шафиҡ еҙнәһенең бәйләнеүе ҡабатланмаһа, үҙе менән ни булғанын аңлар-аңламаҫ ҡалған Мәликә, бәлки, артабан да түтәйе эргәһендә йәшәп тик ятыр ине. Әммә йәш тәндең тәмен тойған аҙғын ир Мәликәне былай ғына ҡалдырманы. Бер көн кисләтеп кенә ҡураға һыйыр һауырға ингәнендә арттан килеп уны көслө ҡулдар шаҡара ҡосаҡлап алды:

— Һағындым... Ер еләгем минең... Аҫылым, татлыҡайым!

— Кит, абый, ҡысҡырам!

— Ҡысҡырһаң, йорттан ҡыуылырһың. Ҡайҙа бараң һин?! Йә, ҡайҙа бараң?!

Ҡайнар тындың битен бешереүенән, ҡомһоҙ ирендәрҙең тештәренә үтеп һурыуынан ир ҡөҙрәтен татып ҡараған Мәликәнең быуыны йомшағандан йомшаны, ҡулынан күнәге зыңғырлап төшөп китте.

— Ах абый... Етәр!

— Етмәй... Был башы ғына... Йәнем, әйҙә... — еҙнәһе уны бесәнлеккә өҫтөрәне, ҡапыл күтәреп алды ла бесән өҫтөнә һалды, ашығыс хәрәкәттәр менән тун төймәләрен ысҡындырҙы, Мәликәнең асылып киткән иҙеүенән тубырсыҡтай тирткән түштәренән шашып үпте. — Хәҙер... Әле һин белмәйһең! Бәхеттең ни икәнен татымағанһың! Был юлы ауыртмаҫ, ваҡыт күп уҙҙы. Түҙҙем! Ер еләгем минең, аҡҡошом! Ах!

Бөтә тәне, булмышы буйлап татлы ҡалтырау йүгергән Мәликә шул саҡ еҙнәһе әйткән бәхетте тиҙерәк булдырғыһы килде:

— Ах абый! Интектермә! Үләм... Ах!

— Йәнем!

Шунда ике тән, ике йән берәүгә әйләнде, эргәләренә Камила абыстайҙың үҙе килеп баҫһа ла туҡтар әмәлдәре ҡалманы. Аҙаҡ, Мәликә үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр татыған ләззәттән аҙыраҡ айныгас, ҡолаҡ төбөндә еҙнәһенең:

— Мин һине көсләмәнем, үҙең бирелдең, ҡыҙыҡай, — тигәне ишетелде.

Был һүҙҙәргә ҡарата үҙенә-үҙе хужа булыуҙан, инде хәҙер Шафиҡ бирер ләззәттең ҡолона әүерелгән Мәликә йылмайып ҡына ҡуйҙы...

Әммә бер рәхәттең бер михнәте тигәндәй, михнәттәр аҙағыраҡ башланды. Был рәхәт Мәликәгә бер түгел, мең михнәт булып кире ҡайтты. Ыҙа сигеүҙең тәүге миҙгеле Мәликәнең ауыры беленгәс үҙен һиҙҙерҙе.

Иң ҡыйыны уға Камила түтәйе менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеү булғандыр, моғайын. Был осрашыу еҙнәһенең абыстай йомошо менән ҡалаға киткән сағына тура килде. Күрәһең, ҡарсыҡ үҙе шул мәлде һайлағандыр.

Көн тыныс үтте. Киске сәйгә ултырҙылар. Мәликә аҫҡа ҡараған да түтәйенә сәй яһай. Самауырҙың тыныс ҡына шаулап ултырғанын иҫкә алмаһаң, өйҙә шылт иткән тауыш та ишетелмәй. Шул саҡ, ни аҙаптандыр, комодтан Мәликәнең бала саҡта уйнаған ҡурсағы осоп төштө. Мәликә, йәһәт ҡуҙғалып, уны ҡулына алды. Ул уны гел бәпәй итеп уйнатты. Ошондай ғына бәпесем булһа, үҙемде яңғыҙ хис итмәҫ инем, тип хыяллана ине. Икәүҙәникәү ҡалғаны бирле түтәйе беренсе тапҡыр ауыҙын асып һүҙ ҡушты:

— Ҡурсаҡ... Мин уны һиңә ситтән килгән сауҙагәрҙәрҙән болан мөгөҙөнә алмашып алып биргәйнем...

Мәликә өндәшмәне, башын тағы ла түбәнерәк эйҙе.

— Әткәйеңдән алып ҡайтҡанымда һин өс кенә көнлөк сабый инең. Ҡартайған көнөмдә бер таянысым, өмөтөм булырһың, тигәйнем...

Ҡурсаҡ күтәреп алған Мәликә таш һын кеүек ҡатты. Эйе, Камила түтәйе уға хөкөм сығара. Мәликә был сәғәтте, минутты күптән көтә ине. Нимә тиһә лә түтәйе хаҡлы, эйе, эйе, ул хаҡлы...

— Ниңә өндәшмәйһең?

Мәликә ҡалтыранып ҡуйҙы, ләкин яуап ҡайтарманы.

— Әткәйең быға тиклем бер килеп хәлеңде белмәне, донъяла бармы-юҡмы икәнеңде һорашманы. Бына хәҙер күрһен инде ҡыҙын. Ҡыҫҡаһы, иртән таң менән бында подвода килеп туҡтаясаҡ. Юл оҙон, арыу итеп кейен, толоп, ашарыңа ал. Күсер һине ҡайҙа ҡалдырырға белә. Унда һине нимә көтһә лә кире был тупһаға әйләнеп ҡайтыу юҡ. Йәшлегеңде аяп, бәддоға уҡымайым, ләкин фатихамды ла бирә алмайым.

Мәликәнең бите буйлап субырлаған йәштәре яһалып та эселмәгән сәйенә, ҡурсағының алһыу битенә туптырлап аҡты. Камила абыстай, сынаяғын түңкәреп амин тотто ла, ойоған аяҡтарын көскә һөйрәп, гәҙәттәгенән ныҡыраҡ аҡһаҡлап, йоҡо бүлмәһенә инеп бикләнде.

Көттө Мәликә. Күсер килеп ҡапҡа шаҡыған сағында ла түтәйенең ут кеүек янған маңлайына ҡулын һалып, үкһеүҙән ҡалтыраған иңбашынан ҡағып:

— Ярар... ҡал. Ғәйепле булһаң да бер һин генә гәйепле түгел. Бер бала үҫер әле, — тип әйтерен көттө. Ләкин ишек асылманы, түтәйе сыҡманы. Күсер, сабырһыҙланып, ҡапҡаны дөмбөрләтә үк башланы. Мәликәгә, толобона уранып, бер түтәрәм икмәк күтәреп, санаға сығып ултырыуҙан башҡа әмәл ҡалманы...

Ул ауылға кисләтеп барып инделәр. Улар туҡтаған өйҙөң алдында ҡараңғыла ҡот осҡос ҙур булып күренгән ағас Мәликәнең һушын алды. Ҡыҙыҡайҙың гәжәпләнеүен аңлапмылыр, күсер:

— Кедр сәтләүеге ағасы. Йәшәмеш ағас икән был, — тине. Шунан, атын бороп, ҡыҙға:

— Ҡапҡаны шаҡы, әткәйең ошо йортта йәшәй, — тине лә күҙҙән дә юғалды.

Мәликәнең ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына шаҡыған тауышына йорттан дәү кәүҙәле ҡатын сыҡты, бәләкәй ҡапҡаның сылбырын оҙаҡ итеп асҡас:

— Кис ҡырында был кем тағы? Кем һин? — тип Мәликәгә тексәйҙе.

Мәликә толобон әле бер, әле икенсе ҡулына күсерҙе:

— Абдрахман тигән кеше кәрәк миңә...

— Абдрахман? Ә ниңә кәрәк ул һиңә?

Мәликә тыштан уҡ ҡалын күренгән донъяның ҡапҡа тотҡаһын дәү, һимеҙ устарында тотоп торған ҡатынға мөлдөрәп ҡарап тора бирҙе лә, сынйырҙағы ике ҡабып бер йоторҙай булып өргән эт тауышында саҡ ишетелерлек итеп:

— Ул... минең... әткәм... — тип бышылданы.

— Әткәң? Абдрахмандың һиндәй ҡыҙы булһа, мин белер инем! Иншалла, был йортта ун алты йыл йәшәйем!

Мәликә хәлен аңлатырға була ауыҙын асҡанса, ҡапҡа шарт ябылды. Тиҙ арала сынйырҙан ысҡындырылған эттең эс яҡтан ярһып ҡапҡа сапсығаны ишетелде. Йорт эргәһенән ашығып ситкә киткән Мәликә ҡышҡы юл буйлап ҡара сәүкәләй атлаған кешеләр яғына һөрләкте. Ул арала усал тауыш эйәһенең:

— Юлдан өс аҙым ситкә сыҡһағыҙ, йығылһағыҙ — атам! — тигәне яңғыраны. Мәликә үҙе лә аңламаҫтан каторжандар төркөмөнә ҡушылды. Улар менән бергә билдәһеҙ яҡҡа, билдәһеҙ яҙмыш ҡосағына атланы.

Төркөм оҙаҡ барҙы. Аслыҡтан, ауырыуҙан, арыуҙан кешеләр юлда үлә торҙо. Үлгәндәрҙе ерләмәнеләр, арыуыраҡ кейемдәре булһа, һаҡсылар алды, ваҡ-төйәген каторжандар үҙ-ара бүлеште. Төркөмгә Мәликәнең нисек килеп ҡушылғанына ла иғтибар биреүсе булманы. Барлау ваҡытында:

— Иванова Анастасия Петровна! — тип ҡысҡырғастары, эргәһендә торған Павел исемле ир:

— Һиңә әйтәләр, — тине.

Тормош ағышын һүҙһеҙ ҡабул иткән Мәликә:

— Мин! — тине. Шуның менән бөттө. Ә бер көн ниндәйҙер ауылдың һарайына бикләп каторжан-

дарҙы ялға туҡтаттылар. Шыйыҡ ҡына өйрә лә бирҙеләр. Йылы аш күрмәгән әҙәмдәр ҡомһоҙланып өйрәгә ташланды, Мәликә генә ҡалаҡҡа ҡағылманы. Павел быны шундуҡ күреп ҡалды:

— Ниңә ашамайһың, Настя?

Мәликә «теләмәйем» тигәнде белдереп баш сайҡаны.

— Әллә үҙеңде насар тояһың?

Мәликә эсенән бөгөлөп ҡаты ыңғырашты:

— Әсәй! Үләм... Әсәкәйем!..

Үлеү каторжандар тормошонда гәҙәти хәлгә әйләнгәнлектән бер кем дә иғтибар итмәне. Тик улар һуңғы аҙымға тиклем йәшәү өсөн көрәшеп, бысылған ағастай ауып, өнһөҙ-тынһыҙ үлеүгә гәҙәтләнгәндәр... Эсен тотҡан Мәликә ҡарҙа тәгәрәп йөрөй башлағас, Павел:

— Сисен! Тартынма! Мин дүрт бала атаһы! Бындай хәлдә беренсе тапҡыр ҡалыуым түгел! — тип бойорҙо. Тауышҡа конвоирҙар эттәре менән килә һалып етте. Береһе теш араһынан төкөрөп:

— Тапһын балаһын, барыбер бында иртәгә тиклем торабыҙ, — тип, Мәликәгә бала табырға рөхсәт бирҙе.

Мәликәнең яулығын системҙеләр. Зәңгәр ерлеккә ҡыҙыл сейә биҙәге төшөрөлгән ошо сепрәккә күм-күк булып тыуған йомғаҡтай сабыйҙы уранылар. Бер-береһенә һырышып, кеме бесән, кеме түшәк һымаҡ нәмәләр табып, ҡарҙа аунаған кешеләрҙе йәш баланың үҙе хаҡында һөрән һалып донъяға тыуыуы хаҡында хәбәр итеүе ҡыуандырманы, бер кемдең дә йөҙөндә онотолған шатлыҡ нурын балҡытырға мәжбүр итмәне, буғай.

— Улың бар, Настенька, — тине Павел ғына.

«Ниңә шул тыуғас ҡына ҡыуып сығарманы икән Камила түтәйе Мәликәне!.. Был бит Хоҙайҙан улар һораған, улар теләгән бала! Ә Мәликәгә бала... кәрәкмәй. Мәликә үҙенең ҡайҙа китеп барғанын да, иртәгә үҙе менән ни булырын да белмәй», — тулғаҡтан, юлдан арыған, хәлһерәгән Мәликә Павел тороп ҡа урап йоҡларға һалғанда бары ошоларҙы уйлап өлгөрҙө.

Иртән иртүк улар йәнә ҡуҙғалып киттеләр. Баланы Павел күтәрҙе. Мәликәнең ике-өс саҡырым барып-бармаҫтан хәле мөшкөлләнде. Хәҙер инде ул Павелдың баланан буш ҡулына аҫылынып, аяҡтарын саҡ шыуҙырып баҫып килә. Өҙөлөп тамағы асты. Ашағыһы килеүҙән ашҡаҙан аҫты биҙенән ауыҙына уҡшытҡыс тоҙло һут йыйыла, күңелен болғандыра. Баланан һуң ипләп йыуылмаған ағзалары, ҡанға ҡатҡан аяҡтары атларға бирмәй.

— Павел, мин ҡалайым... Атһа атһындар... мин бара алмайым...

— Һинең балаң бар!

Ниндәйҙер бер ҡасабаға килеп еттеләр. Бында уларҙы туҡтатманылар. Юл ситендә кешеләр өймәкләшеп тора.

— Каторжандарға аҙыҡ бирмәҫкә! Кем халыҡ дошмандарына ярҙам ҡулы һуҙа, шул урынында атып үлтерелә! Каторжандар! Кем урындағы халыҡ ҡулынан аҙыҡ ала, шул урында атып үлтерелә, йә эттән талатыла!

Мәликә күҙ ҡырыйы менән кешеләрҙең кеҫәһендә, ҡуйынында икмәк бар икәнен күреп ҡалды.

— Павел! Мин... икмәк күрҙем.

— Тыс-с!

Ана бер ун-ун ике йәшлек ҡыҙ йәшен тиҙлегендә ҡуйынынан икмәк сығарҙы ла Павелға тотоноп атлаған Мәликәгә һондо. Әммә шул саҡ конвоирҙың:

— Төркөмгә яҡын килмәҫкә! Атам! — тигән тауышы яңғыраны. Мәликә икмәкте тота алмай ҡалды, һыныҡ төшөп китеп, күтәренке юлдан түбән шыуҙы. Павел икмәк артынан һикерҙе. Күҙ асып йомғансы ул икмәкте эләктереп өлгөрҙө, ләкин шул уҡ секундта атыу тауышы яңғыраны. Мәликә ни булғанын аңлап өлгөргәнсе аҡ ҡарҙа бер ҡулына бала, икенсеһенә икмәк киҫәге тотҡан Павел ҡанһырап ята ине.

— А! А-а-а! — Әллә балаһына, әллә Павелға ташланған еренән Мәликәне ҡаты ҡуллы берәү тотоп алды:

— Аҡылһыҙ!

Артабан уны ике яҡтан кемдәрҙер тотоп алға өҫтөрәне:

— Атла, ҡыҙыҡай! Үлмәгән булһа, балаңдың ауыл эсендә ҡалғаны яҡшы. Былай ул бөгөн булмаһа иртәгә үлер ине!

Бер генә тапҡыр булһа ла әсәһенең һөтөн татып та ҡарамаған сабый билдәһеҙ ауылда билдәһеҙ кешеләр ҡулында ятып ҡалды. Әҙ, бәлки, уға ла пуля тейгәндер? Павел мәйете эргәһендә эттәр көслө абалай ине. Ни булғандыр, уныһын Мәликә әле лә белә лә, юрай ҙа алмай...

Артабанғы ваҡиғалар Мәликә тормошонда эҙһеҙ юғалмаһалар ҙа, күңелен яҡты нур булып балҡытманылар. 610-сы саҡырымға килеп еткәс, уларға туҡтарға ҡуштылар. Унда торған бер баракка шул саҡлы юғалтыуҙарҙан һуң да этап менән килгән халыҡ һыйып бөтә алманы. Яңыларын һалдылар. Үлә торҙолар, өҫтәлеп килә торҙолар. Яҙ етеп, йылғала боҙ киткәс, каторжандарҙы пароход менән килтерә башланылар. Мәликәне ашнаҡсы итеп эшкә ҡуштылар. Эш ауыр булһа ла йәш организм үҙенекен итте: Мәликә, мәле еткәс һутланып бешкән сейәләй, ҡыҙ ҡорона етте.

Күҙгә күренгәс, уға хужа ла тиҙ табылды. Мәликәне халыҡ «Верховный правителдең подстилкаһы», «Курва», «Краля» тип атай башланы. Мәликә башта ғәрләнде, ләкин нишләмәк кәрәк? Ул — ҡол ҡыҙ, хужаға буйһона, ә хужа өҫтөндә — тағы хужа. Ситтән түрәләр килһә, уларҙың теләген үтәргә лә ебәрҙеләр. Мәликәне шулай «арзан тауар» ҡушаматы аҫтында йөрөтөпмө йөрөттөләр...

Нисектер бер туҡтап ял иткән саҡта Мәликә Павелдан: «Абый, кешеләр ниңә йә яҡшы, йә яман булып тыуалар икән? Яҡшы кешеләрҙе генә тыуҙырып, ямандарын тыуҙырмай ғына ҡуйһа, Хоҙайға насар булыр инеме ни?» — тип һорағайны. «Оho, — тине Павел. — Уҡырға тура килһә, һинән, моғайын, философ сығыр ине. — Шунан ул уйланып ултыра бирҙе лә: — Кеше бит, Настенька, донъяға бер генә тапҡыр түгел, ә күп тапҡырҙар тыуа. Аяу белмәгән, усал кешеләр, енәйәтселәрҙең йәне — йәш йән. Уларҙың үткән ғүмерҙәренән килгән тәжрибәләре аҙ, йә бөтөнләй юҡ. Шуға күрә улар аҫ, киҫ, үлтер, язала кеүек бойороҡтарҙы ғына башҡарыуға һәләтле. Уның өсөн уйларға, башты эшләтергә кәрәкмәй. Кемдең башы эшләй — шуларҙы лагерҙарға, төрмәләргә серетәләр, аталар, аҫалар... Ә кем эшләргә, музыка яҙырға, асыштар яһарға тейеш? Ҡалған-боҫҡан халыҡмы? Настенька, мин күп уҡыным, күп ил гиҙҙем, күпте күрҙем, ләкин бындай мәхшәрҙе, үҙ граждандарына ҡарата бындай ҡырағай сәйәсәт алып барғанды... Беләһеңме, Настенька, бөгөн беҙҙе эттән талатып ҡыуалаған конвоирҙар киләһе тормошонда зәғиф, алйот, кәрлә булып тыуасаҡ... Вәхшилек юлынан барып, кешелек бер ҡасан да таҙарына, сифат яғынан яҡшыра алмаясаҡ». Мәликә уның һәр һүҙен иғтибар менән тыңланы. Ниңә уның атаһы ла, еҙнәһе лә Павел һымаҡ изге күңелле булманы икән? «Павел, әллә һин изге заттанмы? Бәлки, һин кеше түгел, фәрештәлер?» — тигәйне Мәликә, аптырауын йәшерә алмайынса. «Кеше мин, Настенька, кеше. Ҡәҙимге бер кеше...» «Ә Хоҙай һине нимә өсөн былай ыҙалата?» «Минеме? — Павел байтаҡ өндәшмәй ултырҙы. — Тимәк, Мәликә, миңә әсирлек тәжрибәһе лә кәрәк булған. Тормошҡа һәр кем һабаҡ алырға тыуа. Миңә кәрәк һабаҡты башҡа берәү ала алмай...» «Миңә ләме?!» — тине Мәликә. «Һиңә лә, — тине Павел. — Һинең күрәсәгеңде башҡа бер кем дә күрә алмай!»

Төрмә түрәләре лә килә-китә, алышына-үҙгәрә торҙо. Лагерҙа йәшәүеңең өсөнсө яҙында унда начальник булып тышҡы ҡиәфәте менән ике тамсы һыу кеүек Павелды хәтерләткән урыҫ килде. Мәликә, үҙ күҙҙәренә ышанмай, бер нисә көн уның артынан күҙәтте. «Шундай мөғжизә булыуы мөмкин микән ни?! Павел... начальник та быны

һиҙҙе, буғай. Мәликә унығ өҫтәленә аш ҡуйғанда:

— Һеҙ мине кем менәндер бутайһығыҙ, ахыры, — тип өндәште.

— Эйе... Һеҙ миңә бер бик һәйбәт кешене хәтерләтәһегеҙ... Павелды...

— Ҡайһы яҡтарҙан ине ул кеше?

— Белмәйем. Беҙ уның менән осраҡлы һәм бик ҡатмарлы шарттарҙа таныштыҡ. Ул минең баламдың кендеген киҫте...

— Балаңдың?

— Эйе, юлда...

— Һиңә нисә йәш һуң?

— Әле ун туғыҙым тула...

— Ләкин һинең «Дело»ла...

— Мин ул ҡатын түгел!

— Ә кем һин?

— Мин — Мәликә. Атайым Абдрахман Харисов...

Яҡшы кеше булып сыҡты лагерь начальнигы. Тыңланы Мәликәне. Мәликәнең әйтеүе буйынса, уның тыуған яғына справка һорап хат ебәртелде. Унан: «Хәҙерге көндә Харисова Мәликә Абдрахман ҡыҙы Ҡыҙылҡаш ауылында йәшәмәй. Бынан өс йыл элек билдәһеҙ сәбәптәр менән ауылдан сығып киткән һәм башҡа әйләнеп ҡайтмаған. Уның тураһындағы белешмә уны ҡыҙлыҡҡа алған ата-әсәһенән алынды» тигән яҙыу килде.

Тотҡонлоҡтан ҡотолоу ҡыуанысы менән үҙенең ни ҡылырын белмәгән Мәликәнең аяҡтары ергә теймәне. Әлбиттә, уның барыр ере юҡ. Ләкин ул азат! Пахандың уны һәр мөйөштә һағалап тороуынан, сәйәси тотҡондарҙың уға ерәнеп ҡарауынан, әсирҙәр өсөн көн дә һыйырға эсерергә тәғәйенләнгән ашлы һыу кеүек баланда ҡайнатыуҙан — барыһынан азат!

Ә бер көндө уны йәнә начальник үҙенә саҡыртты.

— Мәликә, бәлки, бында эштә ҡалырһың? Үҙеңә айырым өй төҙөп бирһәк...

— Юҡ, начальник! Мине ебәрегеҙ!

— Ә ҡайҙа юл тоторға итәһең?

— Мәскәүгә!

— Мәскәүгә?! Ә унда кемең бар?

— Әсәйемдең һеңлеһе! Мин уны эҙләп табырмын!

— Мәскәү ҙур...

— Булһа ла... Ҙур ерҙә эш табыуы ла еңелерәк...

— Иртәгә пароход үтә. Таң менән.

Ул төндө күҙенә тамсы йоҡо инмәне Мәликәнең. Пароходтың гудогын ишетмәй ҡуйыуҙан ҡурҡты. Ә таңғы биштәрҙә уға ат, күсер биреп, пристангә төшөрҙөләр. Исемһеҙ, һандар менән генә билдәләнгән, бетле, ҡутырлы, ас, яланғас, нәфрәт һәм хәсрәт тулы лагерь юлдың һәр боролошо һайын арттараҡ ҡалды. «Юлда пароход һәләкәткә осраясаҡ, кешеләре батып үлеп бөтәсәк!» — тиһәләр ҙә Мәликә ул лагерҙа ҡалырға риза булмаҫ ине...

Нисек кенә ҡыҫып сығармаһын, Мәликәнең аҡсаһынан Мәскәү вокзалына аяҡ баҫҡанында елдәр иҫкәйне. Камила түтәйе Зәйнәп тигән һеңлеһен Арбат тигән ерҙә йәшәй тип һөйләй торғайны. Мәликә, эҙләй башлағас, Арбат тигәндәренең бик ҙур икәнен күрҙе. Кәбән эсенә төшөрөп ебәргән энәнде табыу мөмкин булмаған кеүек, Мәскәү һынлы Мәскәүҙә Зәйнәп атлы кешене табыуҙың ысынбарлыҡҡа тап килмәүен дә аңланы Мәликә.

Этелә-төртөлә вокзалда йоҡлап йөрөнө ул. Ас булғас, буфет янында, пирожки һатҡан ҡатындар тирәһендә ураланды. Яҡын барыуын бармай, әммә күҙен дә ала алмай. Бер көн уға буфетты йыйыштырыусы иғтибар итте.

— Бик сибәр ҡыҙһың... Үҙең асһың, йә, был нимәгә ярай?! — тип баш сайҡап тел шартлатты итләс ҡатын. — Барыр ерең юҡмы ни?

— Юҡ.

— Документтарың?

Мәликә костюмының түш кеҫәһендә ятҡан, лагерь мисәте менән бирелгән ҡағыҙҙы Мәскәүгә килеү менән йыртып ырғытҡайны.

— Юҡ.

— Әйҙә, сәй эсерәм...

Эсенә йылы төшкәс, кәйефе күтәрелде Мәликәнең.

— Апай, миңә лә һеҙҙең янда берәй эш булмаҫмы? Кухня, ҡашығаяҡ тирәһендә эшләү тәртибен беләм.

— Ҡайҙа ла бер һүҙҙе әйтәсәктәр: паспорт, прописка.

— Ә миңә нишләргә?

— Эш сәғәте бөткәнде көт, минең менән китерһең...

Шул китеү Мәликә яҙмышының йәнә бер битен асты. Теге ҡатын уны бик ҡупшы кейенгән, битенә кершән-пудраны йәлләмәй яҡҡан Магдалина менән таныштырҙы. Магдалина уны янсыҡ суғы кеүек кейендереп, һылап-һыйпап, Клеопатра тигән тәкәббер һәм, йәшәүенә ҡарағанда, бай бер ҡатын менән осраштырҙы. Шунда Мәликә бер ай буйы ял итте. Магазиндарға, рестарандарға йөрөттөләр, һылыу-һылыу ҡыҙҙар менән таныштырҙылар, нәзәкәтле манераларға өйрәттеләр, ҡыҫҡаһы, уға профессиональ фәхишә курсын үткәрҙеләр. Исеменән тыш уның «Белый пудель» тигән ҡушаматы барлыҡҡа килде. Күрәһең, Мәликә тәненең аҡлығы шул исемде йәбештерергә булышлыҡ иткәндер. Тиҙҙән «Белый пудель» хужабикәһенә арыу ғына табыш килтерә башланы...

Мәликә нисек кенә үҙ эшенең оҫтаһына әүерелмәһен, күңеленең түрендә ирле, балалы, йортло булып йәшәү хыялын йөрөттө. Сигергә әүәҫ ҡыҙҙың иғтибарын магазиндағы әҙер өлгө йәлеп итте: эшләпәле ир менән ҡупшы кейенгән ҡатын тротуар буйлап атлай, алсаҡ йөҙлө, картиналарҙағы фәрештә кеүек ҡыҙ бала әсәһенә сәскә шәлкеме һуҙа. Күк йөҙө аяҙ, ара-тирә ҡыйғас болоттар ғына йөҙә, ағастар, сәскә түтәлдәре, ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән йәшеллеккә сумған йорт...

Шул өлгөнө алып ҡайтып, диҡҡәт менән эшкә тотонды Мәликә. Эшенән арып, тәмәке төтөнө, вино-араҡыларҙан, хайуан дәрәжәһенә еткән ирҙәрҙән арып, талсығып ҡайтҡан саҡтарында ла күҙ алдына башлаған эше килеү уның тормошона яңы мәғәнә, күңеленә йылы бирҙе. Өйҙө ул айырыуса дәртләнеп нағышланы, әйтерһең дә нағыш һырымай, ә уның һәр кирбесен үҙ ҡулдары менән һала... Ә бына иреҡәйҙең күҙҙәре өлгөлә һоро ине, Мәликә, уйланып ултыра бирҙе лә, энәһен зәңгәр еп менән һабаҡланы: күк төҫөндә булһын әйҙә, һауа төҫө — йәшәү, өмөт төҫө...

Мәликә тормошоноң шул йылдарын хәтерләткән берҙән-бер иҫтәлеге булып хәҙер стенаға рамлап, быяла аҫтына ҡуйған ошо күренеш тора. Мәликә Әйүпкә эйәреп Мәскәүҙән киткән сағында бары шул сигеүле туҡыманы ғына алды үҙе менән...

Өйгә әре-һәре яҡтылыҡ тула башланы. Йоҡоһоҙ, бөтә тормошона байҡау яһап үткәргән төндән Мәликәнең күҙҙәре ҡыҙарҙы, башы шауланы. Хәҙер бына күрәҙәсе ҡарсыҡ Әйүпте үҙенә саҡырта. Нимә әйтергә итә ул иренә? Мәликә иренә бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләй алманы. Йөрәге етмәне. Ә ҡарсыҡ әҙәмде үтәнән-үтә күрә. Мәликәгә әлеңге тормошо ҡәҙерле. Нисек кенә ҡырыҫ булмаһын, Әйүпте ул яратып өлгөрҙө. Бәлки, ул Әйүпкә, үҙенсәлекле үткәне арҡаһында, тәнтүшәк йылылығын биреп бөтөрә алмағандыр... Ләкин Мәликә ире менән ихлас йәшәй, балаһының аталы булыуы, атаның да баланы яратыуы уның күңелен күктәргә күтәрә. Шулай уҡ Мәликәнең Таулылағы тормошо таңдарҙа күрелә торған ҡыҫҡа һәм татлы төш кенә булыр микән?!

* * *

Буран тыныу түгел, көсәйгәндән-көсәйҙе. Тәбиғәт ҡоторона башларҙан ике-өс көн алда Ихсанбайҙың яралары күҙенә ут күрһәтеп һыҙлай башланы. Мейескә ҡыҙынып та, ыыуынып та ҡараны — мәгәр тән йәрәхәттәренең үҙәккә үтеп әрнеүен баҫырға әмәл тапманы. Үҙенә нисек кенә һалҡын мөғәмәлә булмаһын, Рауза ла уға йәлләп ҡараны, һыҙланыуҙарын баҫҡандай им-том өйрәтеп маташты:

— Шәңгәрәйҙе... улыңды мин ҡымырҡа майы менән ыыуып һалам гел... Һин дә шуны һөрт... Анау айыу майың ҡалманымы? Ҡана шуны эретеп бирәйем?

— У ниндәй айыу майы?!

— Аһ, теге... үҙең...

Ихсанбай артығын ыҫҡындырғанын аңланы: оноторға тейеш түгел ине бит ул ниндәй «айыу майы» хаҡында һүҙ барғанын. Теге саҡ аңғармаҫтан кәртәһенә килеп ингән һыйырҙы, былай көсө етмәҫтәй булғас, обрездан атып йыҡты. Башы-тояғын, тиреһен, эсенән сыҡҡан бызауын картуф баҡсаһына өйөлгән ҡыйлыҡ эсенә күмгәс, Рауза ит ҡайҙан тип төбәшмәһен тип, һунарсылар айыу алған, шуны һатып алып ҡалдым, тине. Үҙе йәһәт кенә Ҡасимдың атын алып тороп, урыҫ ауылына иттең байтаҡ өлөшөн тейәп китте һәм тәмәкегә, көмөшкәгә, дарыға, он, ярма, күрергә алыштырып алып ҡайтты. Эҙемтәләренән ныҡ ҡына шөрләһә лә, «һунарсыларҙан һатып алып ҡалған айыу ите» вағиғаһы шыма үтеп китте. Әле бөгөн килеп әллә ҡасан ашалып, һөйәктәре этkә ташланып бөткән «айыу итен» Рауза алйот телгә алып ултырасы?!

— Сепрәк баш, — Ихсанбай гәзиткә уралған самосадын ашығып-ашығып, йүтәлләй-йүтәлләй һурҙы, — Нух заманында ашап бөткән бер бәс айыу итенең әллә булған, әллә булмаған майын хәбәр итеп һөйләп ултырмаһаң...

— Бер бәс тип... Урыҫ ауылынамы, Тубин баҙарынамы апарырға тип тейәгән итеңде күргән дәһа у Шәңгәрәй... Әле төнә генә һөйҙәне шуны. Айыу һәләк тигәнсә һур ине ти бит у... Мунсаның ишек ярығынан ҡарап торҙом тейсе у...

— Шәңгәрәйгә ышанһаң!..

— Шәңгәрәй тигәс тә... Иҫәр тиһәң дә... У, бахыр, бер ҙә алдай белмәй ҙә у!

— Алдамаһа, йәшә шуның менән! Мында минең башты юҡ-бар хәбәрең менән серетәһең, — Ихсанбай, ярһыуын тыя алмайынса, мейес алдында ятҡан утынды Рауза яғына елсәне. — Юға-а-ал! Күҙемә күренмә-ә-ә!

Утын Раузаға теймәһә лә, һикеләге етеле шәмдең ҡыуығын селпәрәмә килтерҙе. Ул арала ишек асылды, унан ҡаштарына, һаҡалмыйығына тиклем ҡар һырыған Мирхәйҙәров күренде:

— Мөмкинме? Хужалар... өйҙәме?

Өйөндә ҡупҡан зилзиләне баҫырҙай кеше килеп ингәс, Рауза Хызыр Ильястың үҙен күргәндәй шатланды:

— Аһ! Аһ! Ҡалай ваҡытлы йөрөйһөң Сынтимер, әй, Азат ағый! — Ул Мирхәйҙәровҡа һүҙ ҡушыр булһа, гел исемдәрҙе бутай. Уныһы — ул, Мирхәйҙәровтың бисәһе иренә Раузаның «ағай» тип мөрәжәғәт иткәнен яратмай. Раузаны Мирхәйҙәровтан күпкә оло яһай торған нисәмә нисә дәлил килтерә. Раузаның да быға бик иҫе китеп бармай.

— Ыстурия бит у! Кешенең йәшенә ыстурия бер ниндәй төҙәтмә индерә алмай, апай! — ти ҙә ҡуя.

Иренән байтаҡҡа йәш, йөҙгә һөймәлекле ҡатынды Раузаның «апай»ҙан һалдырыуы ла кәмһетмәй ҡалмайҙыр, шәй. Әле лә Рауза «ағай» һүҙен айырып, яҡынлыҡ, улай ғына түгел, туғанлыҡ сифаты бирә торған «ағый» рәүешле итеп әйтте.

— Әллә мәлһеҙ йөрөйөм инде? — тип ҡаушабыраҡ ҡалды Мирхәйҙәров, һикеләге утынды, иҙәндәге быяла ярсыҡтарын абайлағас.

Утын ағасын кире усаҡ алдына, ҡыуыҡ ярсыҡтарын сүп биҙрәһенә ташлаған арала Рауза уға ҡарап тулған айҙай йылмайҙы:

— Ошо ағайым булһа, юҡтан уңайһыҙҙанып ҙа торор... Килеп яҡшы иттең, саҡырып алырға эштән бушап булмай... Үт, әйҙә, ултыр! Мынау... бесәй, ҡороғоро, арты бешә баштағанса плитәлә ятҡан да, тура шәмгә һикерҙе, башы баҙҙан сыҡмағыры нәмә...

Килгән кешегә һүҙ ҡатмауҙы Ихсанбай ҙа килештермәгәндәй итте:

— Һыҙҙандыра, Азат Әһлиевич... Ҡуй инде... был һуғыш тигәнең... Үлтереп кенә ҡуйған булһа...

— Йә-ә... үлергә ашыҡмайыҡ әле... Бына мин дә... теге... буранда нимә ҡыҫтай тигәндәй... һиңә килеп ултырам...

— Рәхмәт, иҫкә алыуыңа...

— Тик мин һине йәлләргә килмәнем, Ишмөхәмәт... Мин һине, ҡорҙаш, эшкә саҡырырға киләм.

— Эшкә?!

Мирхәйҙәров, түш кеҫәһенән гәзит осмото сығарып, Ихсанбай һуҙған самосадҡа үрелде:

— Ҡатыраҡ булыр микән?.. Элекке шәптек юҡ...

— Эшкә тиһең, ә ниндәй?..

— Фермаға. Хисапсы булып... Саяфҡа ла кәңәшсе кәрәк. Әллә йәш, әллә иҫәр... Йүнләп тарта алмай. Гелән тегене тегеләй, быны былай ит тип туҡып тороу кәрәк.

— Әллә... минең хәлдә... Көс етер микән?

— Кеше араһында булһаң, әҙерәк һыҙланырһың. Уның дауаһы шул.

Ул арала Рауза ҡаҙандан картуф һоҫто. Сандыҡтан һары май, ҡорот, ҡыҙыл эремсек индерҙе, ашъяулыҡ түшәгәс, аш-һыуға яҡынлаған ирҙәрҙең алдына күктән төшкәндәй «аҡбаш» ҡунаҡланы.

— Әйҙәгеҙ, ашағыҙ. Яман көндә — яҡшы аш...

Ихсанбайҙың күңелен лезвия менән телгәндәй һағыш сыйып үтте: был мәҡәлде әсәһе гел ҡулланыр ине... Әсәһе барҙа ҡайһылай ҡурсыулы, аяулы булған ул, тик ҡәҙерен генә белмәгән.

«Фермала мал ас», тип өҙгөләнгән Мирхәйҙәров, ашъяулыҡта ризыҡ муллыҡҡа ымһынып, оҙаҡ ултырманы.

— Инеп кенә сығайым тигәнсә, — тине ул тун төймәләрен элдектергән ыңғайға Раузаға ҡарап, — әллә ниндәй йыйынсыҡтарыңды сығарып бөттөңсө, Рауза?

— Аһ-аһ, — Рауза, үҙ сиратында, уның бүркендә эрегән ҡар һыуын һелкеп төшөрҙө, — майһыҙ таба ҡупмай, кем, Азатулла ағайым. Беҙ ни икебеҙ ҙә хөкөмәт әтәсе бит. Берберебеҙгә йомошобоҙ төшмәй түгел төшә...

— Һинең менән килештек, — ул Ихсанбайға ҡул һуҙҙы. — Иртәгә иртүк үҙенде фермала хисапсы урынында күрерemә ышанам, Ишмөхәмәт.

— Эй-йе... Һөйләштек. Самалап ҡаралыр... Эштәмәгән эш түгел. — Ихсанбай, ҡулына таяғын алып, ишекте асты. — Тик мына бураны... Һыйырҙар күтәртһә, белмәйем, мал итеп алыуҙары...

Шул саҡ алдан сығып болдорға баҫҡан Мирхәйҙәров Ихсанбайҙы, уның артынан сыға башлаған Раузаны йыға яҙып артҡа сикте:

— Уй!

— Көсөк кенә ул! — Ихсанбай, Мирхәйҙәров үҙе яңыраҡ алып сынйырға ултыртҡан көсөгөнән ҡурҡты тип белеп, ғыжылдап көлгәнгә оҡшаған тауыш сығарҙы. — Үҙе һинән ҡурҡалыр әле ул меҫкен. Рауза, берәй нәмә сығарһаңсы шуға.

Ләкин... ырылдау етди тойолғас, Ихсанбай болдорға үҙе сыҡты.

— Туҡта, тороп тор! — Ихсанбайға ташланып, уны аяҡтан йыҡҡас, биттәрен, ҡулдарын ҡалдырмай ялаған, сыйнаған, илағанға оҡшаш ауаз сығарған башмаҡ ҙурлығы этте күргәс, Мирхәйҙәров та, уның артынса икмәк һыныны тотоп сыҡҡан Рауза ла өнһөҙ ҡалдылар. Дәү эттең тәпәйҙәре аҫтында ауынаған, хайуандың ялауынан тонсоғоп барған Ихсанбай:

— Туҡта, Күкбүре! Шашма! — тип ғыжылдағас, Мирхәйҙәров, һуғышты разведка часында үткән өлкән лейтенант, ҡулындағы бүреген дә кейергә онотоп, буран шығырҙығын сығарған ҡапҡанан нисек сығып киткәнен дә һиҙмәне. Ә Ихсанбай бәйләп ҡуйған тыңҡыш ҡара көсөк, Раузаның аяҡ араһына йомолоп, йәтеш ҡойроғон ҡайһы еренә ҡыҫып ҡуйырға белмәй, дер-дер ҡалтыранды...

* * *

Буран тынманы. Ферма малы өсөн бесәнгә барыу түгел, малсылар мал янына эт ыҙаһы менән килеп етәләр. Кем иртәрәк тора, кемдең ишеге эскә асыла — шулар күршеләренекен көрәп аса. Мәҙинә һы-

йыр аҙбары эргәһендә туҡтаны: ҡапҡаһы төбөнә күсереп алып килеп һылап-йәтешләп тау өйөп ҡуйылған... Эскә инһәң, эстәре үткәшкән малдар уны күреү менән, бер тауыштан баҡырып, сынйырҙарын сыңғыратып уның яғына әйләнәсәк. Мәҙинә, бурандың тауышында берсә Буранбай, берсә йәш кәләшенә тунлыҡ йәнлек ауларға Ашҡаҙар буйына шәшкегә киткән егет һағыштарын, берсә ялан ғына ерҙән боландай йүгергән Зөлхизә, берсә ер ҡыртыштарында аяҡ табандарының ҡанын туҙғытып, «илкәйем» тип атлыҡҡан Ғилмияза әрнеүҙәрен тыңлап, тышта тора бирҙе. Мәҙинәнең дә һағыш-рәнйештәре, тойғо-хәсрәттәре эсенә һыймай ҙа бит, тик Ер менән Күк тулаған кеүек тулай алмай, барсаһын күкрәгенә һыйҙыра. Хәҙер ул сараһыҙлыҡтың ни икәнен белә. Ошо сараһыҙлыҡ уны һындырырмы, бахыр, мәжнүн бер йән итерме, әллә сараһыҙлыҡтың үҙенән дә саяраҡ, ҡеүәтлерәк көскә әйләнерме? Тегендә, алыҫта ҡалған Мәскәү кистәренең береһендә, дөйөм ятаҡтың Мәҙинә менән Әптеләхәт йәшәгән бүлмәһендә, Давид Соломонович менән булған бер әңгәмә иҫендә Мәҙинәнең. Был һөйләшеү Әптеләхәт өҫтөндә болоттар ҡуйыра башлаған мәлгә тура килде.

— Әгәр хәҡиҡәт, ғәҙеллек тип даулаша башлаһаң, аҙағы дар ағасы йә булмаһа Иисусты көткән яза менән тамамланасаҡ, — тине Давид, һаҡалын нәҙек оҙон бармаҡтары менән семтекләй-семтекләй.

— Тимәк, һинеңсә, — тине Мәҙинә, — көрәш мәғәнәһеҙлек?

— Көсөн тауҙар, ҡаялар менән көрәшеүгә сарыф итһә, йылға бер ҡасан да диңгеҙгә барып етә алмаҫ ине, Мәҙинә!

— Ә һин, Әптеләхәт, һин нисек уйлайһың?

Әптеләхәт эңерҙә тағы ла аҡһыллана төшкән сырайында ҡара күмер кеүек күренгән күҙҙәрен тәҙрәгә йүнәлдергән килеш:

— Һәр кем күрәсәген үҙе күреп бөтөргә тейештер тим мин. Йылға инештән генә башлана. Аҡҡан һайын киңәйә, тәрәнәйә, үткән юлы уны үлемһеҙ итә. Һин күрә торған ҡайғыны ла, рәхәтте лә икенсе кеше кисерә алмай. Һин үткән юл — ул һинең тәжрибәң, һинең байлығың. Арыһаң — хәл йый, йығылһаң — кире тор. Һөйөүҙән генә ваз кисмә. Ни тиклем ҡыйын булһа ла, бары тик һөйөү хисе генә кешегә көс, йәшәүенә мәғәнә бирә, — тине.

— Һеҙҙең менән миңә шундай рәхәт, еңел, ләкин... — Мәҙинә: «Был бәхет оҙаҡҡа бармаясаҡ!» тип әйтергә итте лә, телен тешләне. Уның урынына: — Ниңә һеҙҙең кеүек кешеләр күберәк түгел икән! — тип көрһөндө.

— Һиңә генә түгел, беҙгә лә рәхәт һинең эргәлә, — Давид Соломонович Мәҙинәнең бармаҡтарынан һыйпап ҡуйҙы. — Һин ҡарамаҡҡа ғына нескәһең, Мәҙинә. Һиндәге көс...

Мәҙинә һүҙҙе шаярыуға борҙо:

— Ҡыҫҡаһы, герой!

Ләкин Давид шаярмай ине:

— Изге кешеләр һәм геройҙар... донъяға икмәк сифатында, кешелекте туҡландырыу маҡсатында, үҙҙәренең Ерҙә сәскән, ләкин Күктә йыйған уңыштарын алып килә. Һин шуларҙың, моғайын, береһелер, Мәҙинә...

Өшөй башлаған Мәҙинә, ышыҡтан сығып, йәнә буран эсенә ынтылды. «Ҡыҙыл мөйөш»тә, бәлки, береһен осратыр. Малдарҙы ҡотҡарыу өсөн кемдер, нимәлер эшләргә тейештер бит инде?! Бына, мәҫәлән, көршәк яһаусы балсыҡтың бөтә серҙәрен, игенсе тупраҡтың, тәбиғәт шарттарының әллә күпме хикмәттәрен белә. Ә малсы? Малсы ни өсөн теләһә ниндәй шарттарҙа ла кеше күҙенә мөлдөрәп ҡарап торған хайуандарҙы аслыҡтан ҡотҡарыу юлын белмәҫкә тейеш?! Мәҙинәне тыңламанылар, бөтә булған аттарҙы бесән ташырға ҡушманылар. Хәҙер, ас малдың үҙҙәрен генә ҡалдырып, ҡайһыһы ҡайҙа ҡасып бөттө.

«Ҡыҙыл мөйөш»тә лә бер кем булмай сыҡты. Ҡарауылсы өйөндә аптырашып ултыралар микән? Мәҙинә һыуына башлаған мейескә

ҡулдарын терәне, күҙе стеналағы һауынсыларҙың көндәлек һауымы яҙып барылған таблицаға төштө.

— Эх!.. — Һауым ныҡ кәмегән. Хатта егерме литр һөт биргән Бөйрәкәй өс литрға төшкән. Таблицала Ғәлимә тәңгәлендәге һандар ғына мин кем дә һеҙ кем тип ҡуҡырайып тора. Ниндәй ҡөҙрәт менән башҡа һыйырҙар астан күтәртеүгә етешкәндә был мул һөт һауыуға ирешә икән?

Ул арала таяғы менән туҡылдап, ығышып, ятып тигәндәй, Ишмәмәт килеп инде:

— Һаумы, Мәҙинә һылыу? Хәлең нисек?

— Рәхмәт, Ишмөхәмәт ағай, шөкөр, — һыйырҙарын алып сығып киткән кешеләр араһында ошо Ишмәмәттең дә булыуын онота алмаһа ла, Мәҙинә тыныс күренергә тырышты. Әптеләхәте бит уға йыш ҡына: «Кешеләр күберәк сәскәне түгел, ә уның һабағындағы энәләрен иҫендә һаҡлаусан. Ә һин, Мәҙинә, энәләрен онотоrға, сәскәләрен генә хәтерләргә тырыш», — ти торғайны.

— Стенанан шул тиклем... ни күҙләйһең?

— Күҙләйем шул... Малдар астан үлергә етешкәндә ҡайһы бер һауынсыларҙың һауған һөтө кәмеү түгел арта барғанға аптырайым!

— Аҡыллы булһаң, уныҡы түгел, һинеке артыр. Бөтәһе лә үҙеңдән. Ғәлимәгә, ана, Герой бирергә итәләр, депутат итеп һайланылар... — хисапсы ғыжылдығы сығып йүткереп, мейес алдына сүгәләне. — Бәхет ҡошо... үҙ ҡулында.

— Ағай! — Тауышындағы ҡырҡыу ноталарҙы йәшерә алмаған Мәҙинә хисапсының алдына килеп баҫты. — Нисек тә булһа йән аҫырарға тырышыу — ул хайуандар өлөшө.

— Ха-ха! Ә һинең өлөш? Һинең, минең өлөш ҡайҙа?!

— Беҙҙең өлөш, кеше өлөшө, башҡалар бәхете өсөн үҙеңде ҡорбан итеү, йәнеңде фиҙа ҡылыу!

— Уһу! Улай шәп булғасың, бар, ана, ас малдарҙы туйҙырыу әмәлен тап! Бар, бар! Тышта буран олой, эсеңде аслыҡ тырнай! Бар, ҡорбан ит үҙеңде. Фиҙа ҡыл йәнеңде!

Мәҙинә, уны тыңлап бөтмәй, сығып йүгерҙе. Ул, Мәҙинә, әмәлен табырға тейеш! Элегерәк, фермала бесән бөткәс, улар тумар баштарын балта менән тумырып малға ашаттылар. Әле уны эшләп булмай. Ҡырға сығыу түгел, өй араһында аҙашырлыҡ. Ҡапыл Мәҙинәнең башына бер уй килде: әгәр ҙә ул һәр бер өйгә инеп, һәр өй хужаһын фермаға бирәр генә тоҡ бесән илтергә күндерә алһа?! Башына хәтәр уй килеүҙән аяҡ быуындары йомшаны. Быны кемгәләр әйтергә һәм бергәләп, өй беренсә йөрөп... Ғәлимәме уны аңламаҫ? Күрһәткестәре шәп булһа ла уның да бит һыйырҙары ас, күтәртеү хәлендә. Әгәр бөгөн малды шул рәүешле ашатһалар, иртәгә, бәлки, буран тымып та ҡуйыр... Буран тымһа, аттар яҡындағы кәбәндәргә китер, ә, бәлки, урмандан тракторҙар ҙа ҡайтып етер.

Өйөнә ҡайтып, малын ҡарап, балаһын имеҙеп килгәс, Мәҙинә йәнтәслимгә ҡарауылсы өйөнә йүгерҙе. Өйгә оҙон һәм ҡараңғы солан аша үтергә кәрәккәнгә, ул, һәрмәләнеп, төпкәрәк атланы. Ҡапыл бышылдап ҡына ҡарыулашҡан тауыш ишетеп, Мәҙинә шымып ҡалды:

— Ишмәмәт тим, ағай, ҡуй! Ярамай, ағай!

— Саяфҡа ярай бит! — Ғыжылдаҡ тауыш ферманың яңы хисапсыһыныҡы, ә тегенеһе...

— Мине ул ... яратам, ти! Ағай... Ҡысҡырам, ағай!

— Ҡысҡырһаң — герой мәнсух һиңә! Быҙауҙарға эсергән һөттө һиңә яҙып герой итергә йөрөгәндәрен белмәй тиһеңме? Фермала бөгөн иң күп һауын, фактически, Мәҙинәлә!

— Һы! Унда таналар ғына бит! Кем ышана?!

— Йә һин миңә биреләһең, йә мин һине... фаш итәм! Бөтә районға рисуай итәм!

— Ағый!

— Ыһ!

— Уһ!

Мәҙинә, нисек ингән булһа, шулай шым ғына сыға башланы.

«Ғәлимә! Элекке әхирәте! Ниндәй оят! Ниндәй түбәнселек!» Биттәре ут кеүек янған, башына эҫе ҡапҡан Мәҙинә ауылға табан атлыҡты. «Онот! Күрмәнем тип уйла! — ти эске бер тауыш. — Әптеләхәт әйтте бит, энәләргә иғтибар итмә тине!..» — Мәҙинә һәр аҙымын бурандан көрәшеп яулап алға барҙы. Ана, өйҙәр. Уларҙан йылы бөркөлә. Һәр өй тәҙрәһе хужаһының йә уйсан, йә моңло, йә һағышлы, йә шаян, йә үсексән күҙҙәре менән ҡарағандай. Төрлө тәҙрәләр, төрлө күҙҙәр, иң мөһиме — битараф ҡараштар юҡ.

...Мәҙинә, бөтә көсөн, иманын, ышанысын йыйып, тәүге ишекте шаҡыны.

* * *

Сәрбиназ ирен көтә. Кәрәсин тултырған шәменең ҡыуығын ялтыратҡансы һөртөп, урынына ҡуйҙы. Мейескә картуф менән тауыҡтан ҡуйылған бәлеш, уның ҡаҙ майы ҡушып баҫылған ҡамыры тәмле еҫ бөркә. Сәрбиназ, бәлештең бөкөһөн асып, ҡайнар һыу өҫтәне: Азат оҙаҡлап, бәлештең рәте китмәгәйе... Өй эсе ҙур түгел, әммә бөтә әйбер үҙ урынында. Тәҙрә ҡорғандарынан алып, мендәр тыштарына тиклем сигеүле был өй эсе тәү ҡарашҡа һоратып килер танһыҡ йән эйәһен көткән еткән ҡыҙ түрен хәтерләтә. Сәрбиназ менән Азат (ул саҡта уға барыһы ла Сынтимер тип өндәшә ине) армиянан ҡайтып килешләй осраштылар. Тирәклегә бер түгел ике сумаҙан тотоп, йәш һылыу ҡыҙ эйәртеп килеп ингән Азат ауыл осонда туҡтап ҡалды. Ҡулъяулығы менән тирләгән битен һөртөштөргәс:

— Шунан... ни ҡылабыҙ, Сәрбиназ? — тине.

— Әлләсе... — булды йәйәү атлауҙан бит остары алһыуланып киткән сибәр ҡыҙҙың яуабы. — Директор ҡайҙа йәшәй икән? Шунда апармаһаң...

— Эйе... анау саҡлы ара сумаҙанын күтәреп килтер ҙә үҙен директорға илтеп ҡуй...

Егеттең шаярып һөйләшеүеме, әллә егет үҙеме күңеленә хуш килгән ҡыҙыҡай бит остарын уйылдырып, күҙен ҡыҫа төшөп, ауылға ҡараны:

— Ошо саҡлы ҙур ауылда ҡоштоҡолай ғына йәнемде һыйындырыр бер генә өй ҙә юҡ микән ни?!

— Былай итәбеҙ, — Азат ҡыҙҙың кәүҙәһен, ике ҡулы менән иңбашынан тотоп, үҙенә борҙо, — өс көн беҙҙә йәшәйһең. Әгәр өс көндән сығып китһәң, үҙең ҡарайһың. Әгәр китмәһәң, миңә кәләш булаһың!

— Абау, шулай уҡ тиҙме?! — Былай ҙа йоморо күҙҙәре ҙурайып киткән Сәрбиназ аптырап егеттең тәүәккәллек, хатта ниндәйҙер ҡырыҫлыҡ менән янған ҡарашына төбәлде.

— Өс көн минең өсөн өс йылдай үтәсәген иҫәпкә алғанда, тиҙ түгел.

— Ауылда үҙеңде әллә нисә ҡыҙ көтөп торалыр әле...

— Уныһы — икенсе мәсьәлә, уныһы һиңә кәрәк түгел.

Бына шул көндән бергәләр улар. Сәрбиназ Азаттарҙан өс көндә лә, аҙнанан һуң да сығып китмәне. Тәү күргәндә үк ҡәйнәһе уны, Азат килен алып ҡайтҡан икән, тип ҡабул итте, аяҡ аҫтына оло мендәр ташланы, бикәсе һыу башланы. Азат үҙе генә һүҙендә ныҡ торҙо: кейәү менән килен өсөн сымылдыҡлы карауатҡа түшәлгән йәймәгә, ҡушлап һалынған эре биҙәкле сатин тышлы мендәрҙәргә дүртенсе тәүлектә генә килеп башын һалды. Шул көндән алып улар тормошонан ниндәй генә тетрәндерерлек ваҡиғалар үтмәне! Азаттың ҡара болоттай сәстәре ағарып һирәгәйҙе, былай ҙа ғүмере ит ҡунмаған кәүҙәһе ҡуранысланып ҡалды, Сәрбиназ да инде элекке тәү ҡарашта уҡ иҫте юйҙырырлыҡ матурлығын күптән юғалтты, тик ҡасандыр бер күреүҙә үк бер-береһенә ғашиҡ иткән хис үҙгәрмәне. Сәрбиназ теге саҡ өс көн буйы яҙғанының башын үҙенеке менән йәнәш мендәргә һалғанын нисек көткән булһа, әле лә шундай уҡ ялҡын, һағыныу менән кис булғанын, хәләленең күпертеп һалып ҡуйған сәскәле мендәргә башын һалғас:

— Йә кәләш, көн нисек үтте? — тип үҙенә әйләнеүен көтә. Сәрбиназ

башта өндәшмәй, шунан йоморо беләктәре менән иренең иңбашынан ҡосаҡлай, алмаш-тилмәш күҙҙәренән үбә, шунан:

— Инде һөйлә, — ти.

Эйе, күберәк Азат һөйләй. Уның тормошо сыбар, һикәлтәле хәл-ваҡиғаларға, көйөнөс-һөйөнөстәргә бай.

Был кис башҡасараҡ булды. Азат Сәрбиназын инеү менән ҡосаҡлап алды:

— Сәрбиназ, кәләшкәйем! Бәләнән имен килеп сыҡтыҡ! Ике башмаҡ ҡына үлде. Һыйырҙар иҫән! Бөтә ауыл ҡуҙғалды. Беләһеңме, кәләш, Исрай ҡарсығы менән анау эскесе Вәләүгә хәтлем фермаға берәр тоҡ бесән илтте!

— Килтергән бесәнде бөтә ташламаһаң ярай ҙа!

— Ҡалды! Иртәгәгә етә әле запас. Бурандың да көсө кәмей башлаған!

— Кемдең башына килгән уй булды был, Азат?!

— Кемдең тиһең? — йыуынырға була ҡулъйыуғысҡа эйелгән Азат кире турайҙы. — Мәҙинә! Ул өй беренсә йөрөп халыҡты ҡуҙғатҡан!

— Мәҙинә?! — Сәрбиназ ашъяулыҡты күкрәгенә ҡыҫты. — Эй балаҡай! Малын тартып алып ҡан илатҡан ғаиләнән шундай кеше сыҡһынсы әле!

— Икенсе берәү әйтһә, тыңламаҫтар ине, — Азат, етдиләнеп, ашъяулыҡ эргәһенә килеп ултырҙы. — Әҙәм бит кемдең кем икәнен барыбер күрә. Мәҙинәнең булмышын яҙмышына төшкән ғазаптар үҙгәртә алмаҫтыр, Сәрбиназ. Әптеләхәттә шундай ине...

— Ә шуларҙы «халыҡ дошманы» тип атарға кемдеңдер теле әйләнә...

— Был ваҡытлы сәйәсәт. Әле бит, ана, төрмәләргә ябылған ун миллион тотҡондоң бер миллионын сығарҙылар. Тормош үҙгәрә, бисәкәй. Сталиндың, Берияның портреттарын бик баҫырға ла ҡушмайҙар. Хәбәрҙәрҙең төрлөһө йөрөй, Сәрбиназ.

— Бәлки, крәҫтиәнгә лә ҡараш үҙгәрер...

— Шулай инде: тарих ҡасан ҡол хеҙмәтенең үҙен аҡлағанын күргән?

— Һыуытмай эс сәйеңде... Әллә бәлеш ҡатыбыраҡ...

— Яҡшы, яҡшы... Бәлеш бына тигән... Иртәрәк ятайыҡ әле, Сәрбиназ.

«Сәрбиназ» тигәнен айырым бер баҫым менән әйтеүе һиҫкәндерә бирҙе. Етди һөйләшеү кәтә, ахыры, бөгөн уларҙы. Әле һөйләшкән хәбәрҙәр гәзәти генә, көндәгесә. Сәрбиназ түшәк йәйә башланы. Сигеүле аҡ мендәр тыштарын сисеп, кәлепләп комодҡа һалды, урын-ерҙе ҡабартты. Йәй йыйып киптереп, ҡолаҡсын мендәр эсенә тултырған хуш еҫле кейәү үләнен дә һуҡҡыслапҡаҡҡыслап еҫен сығарҙы. Азаттың аяғын йылы һыу менән йыуҙырып, ҡоро киндер сепрәк менән һөрттө:

— Аяҡтарың талалыр, ҡартыҡайым... Бигерәк көн оҙоно бушамайһың...

— Һинең эшең минекенән күберәк, Сәрбиназҡайым. Өй эше бит тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй...

Икәү сөкөрләшә-гөрләшә сымылдыҡ эсенә инеп ятҡас, әүәл Азат телгә килде:

— Сәрбиназ, мин әкәмәт бер күренештең шаһиты булдым бит әле.

— Ҡасан?

— Бөгөн түгел... Буран башланып ҡына тора ине. Һин теге Фәүзиә ҡарсыҡтарҙың этен хәтерләйһеңме?

— Күкбүренеме?

— Ҡара, исемен дә онотмағанһың.

— Онотоrға ни... Ҡарсыҡҡа барғылап йөрөнөм, күҙем йылан ҡарағы булғас, шул Фәүзиә ҡарсыҡ имләне лә инде! Ә һинең билеңде...

— Шул, шул... Бүре хәтлем бар ине ул эт.

— Әллә ҡайҙа булды бит ул. Өй янғас, ул да юҡҡа сыҡты, әллә инде бергә янып үлде...

— Мин, Сәрбиназ, шул этте күрҙем.

— Кит инде, атаһы!

— Ысын...

— Тегеләрҙең өй урынында йөрөймө меҫкен?

— Юҡ шул.
— Әллә ҡырҙа?!
— Ишмөхәмәткә барғайным.
— Шунан?
— Шул. Сәй эсерҙе Рауза. Ярты сығарҙы. Оҙаҡ ултырманым. Ишмәмәткә эшкә әйттем дә сығып барһам... Бер быҙауҙай эт тешен ыржайта. Ҡурҡып, артҡа тайпылдым. Аптырағас, Ишмәмәт алдан сыҡҡайны, теге эт ташлан мының өҫтөнә! Сыйылдай, ялай!..
— Һуң... — Сәрбиназ ни ҙә булһа әйтә алмай тынып ҡалды. Азат та бер талай өнһөҙ ятты.
— Мин аптырамаҫ инем этте Фәүзиә ҡарсыҡ тупһаһында, йә өйө урынында күрһәм. Мәҙинә йортонда осратһам да иҫем китмәҫ ине — күрше. Эттең йөрөп-йөрөп төләгенә ҡайтыу хәле бар бит инде ул...
— Был нимә була һуң инде, атаһы? Сыйылдай, ялай тиһең бит әле...
— Шул, шул...
— Йә хоҙай!.. Был ни булыр икән, атаһы?!
Азат өндәшмәне: иҙел күрмәй итек сисмәҫкә өйрәнгән разведчик. Мәгәр Ишмөхәмәтте тәү күргәндә үк күңеленә оялаған шик ҡырмыҫҡа иләүеләй мыжғый башланы.

* * *

Камалетдиновты Мәликәһенән ишеткәндәре уйға һалды.
— Күрәҙәсе ҡарсыҡтың һине күргеһе килә, — тине Мәликә кис йоҡларға ятҡас.
— Ниңә, һин барғас етмәйме? Әйткәндәй, — Әйүптең тауышына уңайһыҙланыу билгеһе сыҡты, — мынау бурандар тәҡәтте алды. Флориданы нимә ти?
— Әйтмәй...
— Йә шул бушҡа ҡорсоп йөрөйһөңдөр тинем дә... — үткәндәге ҡыҙының йоҡламауы һалған хафаларҙы онота башлаған Әйүп йоҡоға китер өсөн уңайлап ята башланы. — Арытылған...
Арыһа-арымаһа ла иренең гел арты менән боролоуына күнегеп бөткән Мәликә, беләгенә башын һалып, ҡалҡына төшөп, һөйләшеүҙең бөтмәгәненә ишара иткәндәй булғас, Әйүп һағая төштө:
— Ҡарсыҡ үҙе былай шәпме?
— Шәптер... Ул һине саҡыра, Әйүп... — ҡатынының тауышында иплелек тә, наҙ ҙа, ғәфү үтенеү ҙә сағылғандай булғас, Әйүп уға табан боролоборак ятты. Бала өсөн яндырып ҡуйылған тоноҡ электр лампаһы Мәликәнең тығыҙ, күпереп торған түштәрендә наҙлы һырҙар яһап ятҡан пеньюарын, ап-аҡ муйынын һырыған ҡулса-ҡулса ҡара сәстәрен яҡтырта. Ахыры ул йөҙгә һурылыбыраҡ та киткән, күҙ төптәренә яңы һырҙар ҙа ятҡан кеүек... Әйе, ҡаршыһына ултыртып һүрәтен генә яһарлыҡ был Мәликәнең. Әле Әйүп уның йәш, еләк кеүек саҡтарын күрмәне, ул мәлдә ниндәйерәк булды икән был мөхәббәт алиһәһе Венераны хәтерләткән, бәлки унан да камилыраҡ һын? Рәсемде насар төшөрмәне йәш сағында Әйүп. Әле лә тонйорап ҡояш батыуын, тәбиғәттең гүзәл бер ерен, матур ҡатын-ҡыҙ һынын күрһә, буяу иҙгеһе килеүҙән ҡулдары ҡыҫыта башлай. Әгәр Әйүп рәссам һөнәрен һайлаған булһа, ул һис шикһеҙ был ҡатынды натура сифатында файҙаланыр ине. Моғайын, ул шулай булыр ине. Ә ҡатыны сифатында... Саҡ ҡына Әптеләхәттән алдараҡ осратһа, Мәҙинәне ҡулынан ысҡындырмаҫ ине. Мәҙинә — гөлдәрҙең гөлө рауза бит инде ул. Әлбиттә, энәләре лә бар. Әммә Әйүп уны ҡосағына ҡыҫып ирендәренән бер һурып үбер өсөн, энәләре урынына йылан ҡаяуы андып торһа ла, уйынан кире ҡайтмаҫ ине.
Үҙенә ҡарап уйланып ята биргәс, иренең күкрәген «уф» тигән ауаз ярып сыҡҡас, Мәликә уҫалая, саялана төштө:
— «Уф» тигәндә килмә яҡын, янырһың ялҡыныма! — тиҙәр мәле, Әйүп...
— Үртәргә тиһәң, һине ҡуш... Әбей мине ниңә саҡыра?
— Барғас, ишетерһең. Һүҙ, моғайын, Флорида хаҡында барыр... Ул миңә әйтмәне.

— Барырға кәрәк тиһеңме?
— Һис шикһеҙ... — иренең үҙенән биҙгәндән-биҙеүен күңеленең алтынсы тойғоһо менән һиҙенгән Мәликә, артабанғы һүҙе менән генә түгел, хәрәкәте менән дә унын асыуына тейеүен аңлап, артына әйләнде һәм бары тик үҙенә генә билдәле уйҙар диңгеҙенә сумды...

* * *

Әйүп Камалетдиновтың килеүен Фәүзиә-Барсынбикә дүрт күҙ менән көтөп алды. Ул ингәс, аяғына йылы ойоҡбаш бирҙе:
— Ошоно кейеп ал, һүҙ кыҫка булырға оҡшамаған.
— Әллә инде, инәй, — Әйүп әбейҙең һүҙен йығырға ҡыймағанға ғына ойоҡбашҡа үрелде. — Оҙаҡ ултырыр самам юҡ, былай. Самаһы — сама, ваҡыты юҡ бит, ҡәһәрең...
— Сталин заманы үтһә лә теҙгенде бушатып булмаймы? — Ҡарсыҡ, аяғын суҡайтып бөкләп, унын ҡаршыһына ҡунаҡланы.
— Сталин булмаһа, уларҙың иҡенселәре бар. Ана әле Булганин баш булып алды. Ишеткәнһегеҙҙер?
— Миңә уларҙың кәрәге юҡ бит, улым. Минең өсөн йәшәү бар, үлем бар. Шул ике яр эсендә йылға-ғүмер аға.
— Лэкин улар бит юлбашсылар...
Фәүзиә урынынан ҡалҡына биреп тамаҡ ҡырҙы:
— Енәйәтселәр. Эйе, улар ҙа кеше. Уларҙың да ғүмере тыуыу менән үлеү араүығы. Ләкин улар шул ваҡыт эсендә күпме ҡан ҡойорға, күпме яҙмыштарҙы баштүбән ҡуйырға өлгөрә. Улар, улым, ябай енәйәтселәрҙән бер генә нәмә менән айырыла: уларҙың өҫтөнә... ҡан сәсрәмәй.
— Шулай ҙа, инәй, Сталин менән Гитлер араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмай...
— Нигә булмаһын? Гитлер бишәр мең кеше һыйҙырышлы газ камералары яһатҡан. Бер тамсы ҡан тамыҙмайынса, күпме әҙәм баштарынан көл-күмер яһаны. Сталин Рәсәй тигән тотош бер илдән төрмә яһап ҡуйҙы...
— Инәй, был һөйләшеү икәү арала ғына, әлбиттә. Гәзит уҡымайым тиһәң дә...
— Эйе, уҡымайым, — һөйләшеү көпә-көндөҙ барғанға күрә, ҡарсыҡтың йөҙөнә бурандан һуң ҡапыл асылып, яҙылып киткән ҡояштың ҡышҡыса һүрән, ләкин яҡты нуры төшә. Был нур унын бөтә йыйырсыҡ-һырҙарын яҡтырта. Әйүптә йәнә рәссам ҡомары ҡайнай башланы: ошо килеш кенә туҡымала һынландыр ине был йөҙҙө! Ай-һай... харап матур булғанға оҡшай түгелме был йөҙ... Ләкин әле ул, ҡартайыу өҫтөнә, янған да. Эйе, эйе... янған икән дәһә ул, янған...
— Ҡарап-ҡарап ултырам да, инәй, һорамаҡсы булдым...
— Мин дә, улым, шуны һорамаҡсы булдым: нигә һин сәйәсәт юлын һайланың? Һин бит арыу ғына төшөргәнһең һүрәтте...
— Дөрөҫ, инәй... — Әйүп ҡайҙан белдең тип һорауҙан үҙен саҡ-саҡ тыйып ҡалды. — Әле лә мине шул әүәҫлек ташламай... Ә инде сәйәсәткә килгәндә... Эйе, шулайыраҡ булды. Институт... разведка мәктәбе... һуғыш... һәм бына — үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.
— Кеше башта, улым, үҙен ижадта һынап ҡарарға тейештер... Рәссам булмай, ситәүкә үреп тамаҡ аҫыраһаң да ижади эш. Әгәр ҙә инде ҡулыңдан башҡа һөнәр килмәһә...
— Эх инәй... Бәндә уйлай, Алла бойора, тиҙәрме әле? Етемлек бит аҡыл таптырмай. Балалар йорто ҡайҙа ебәрҙе — шунда уҡыныҡ...
— Һиңә икенсе юҫыҡ менән китергә лә юл асылған булған...
— Дөрөҫ... Рәсем уҡытыусыһы Ленинградҡа Художество академияһына ебәрергә документ әҙерләткәйне... Эйе, эйе... ул хәл булды.
— Ана шул булған һинең ысын юлың.
— Инәй, яҙмышымдың икенсе йүнәлеш алыуында мин генә гәйепле түгел. Әле балалар йортонда бишенсе класта уҡығанда уҡ беләгемдең ҡаны менән ата-әсәйемде һуйып сығыусыларҙы табырға ант иттем.

— Һин?! Ант иттең?

— Эйе. Ант иттем. Һуғыштан һуң хәрби карьеранан баш тартып, ә миңә ҙур карьера яһарға мөмкин ине, бала сағым өҙөлөп ҡалған, ата-әсәмдең ҡанына буялған ошо ергә ҡайттым.

— Таптыңмы һуң? Үс алдыңмы?

— Тапҡайным, үс алып өлгөрмәнем. Мин эҙенә төшкәндә уға инде зыяратта ҡәбер ҡаҙалар ине.

— Эйе, Әйүп ҡустым, бына ҡасан килеп осрашты беҙҙең юлдар!

— Беҙҙең?! Ләкин мин һеҙҙең менән...

— Мин, улым, һин эҙләгән ирҙең... ҡатыны инем...

— Ләкин...

— Тыныслан, Әйүп. Мин Барсынбикә, Диңгеҙхан Моратовтың ҡатыны инем. Мин һинең ҡаршыңда ултырам.

* * *

Камалетдинов Тирәклегә колхозсыларҙың дөйөм йыйылышына барыуҙы башҡаса кисектермәҫкә булды. Ни булһа, шул булыр, тип уйланы ул. Үҙ-үҙенән ҡасып ҡотолоп булмағандай, Мәҙинә менән осрашыуҙы кисектереүҙән дә фәтүә юҡ. Эйе, Мәҙинәнең шоморт ҡара күҙҙәре: «Ә атайым? Уны ҡотҡарыу өсөн бер ни ҙә эшләмәнеңме ни?!» тип төбәләсәк. Эйе, Мәҙинәнең ҡарашында: «Ошомо ярҙамың? Һинең ярҙамың арҡаһында имсәк бала менән көнө-төнө тиҙәк араһында йөрөйөм түгелме?» тигән һорау ярылып ятыр кеүек. Бөтәһен дә аңлай Әйүп, бөтәһен дә. Ләкин ул бит үҙе лә тышаулы айғыр! Нисек кенә тулаһа ла ауыҙлығын тешләп өҙөрлөк түгел. Хатта, күңеле тиңһенмәгән, тәне тартмаған Мәликәнән дә арына алмаясаҡ. Партия уставы ғаилә мәсьәләһен үтә ҡаты ҡуйған. Ҡайҙа ынтылма — тышау, ҡайҙа ҡарама — ауыҙлыҡ. Тик бына йөрәк мәсьәләһендә генә уставта бер ни юҡ. Уға бойороп та, бик һалып та, ауыҙлыҡ кейҙереп тә булмай...

Китергә була толобон алырға ингән Әйүпкә Мәликә ҡырын ғына ҡараш ташланы:

— Әллә... ат менән юлға сығаһың?

— Тирәкле яғында буран шәп булды, машина үтә алмаҫ тием...

— Ҡыңғырау ҙа таҡ әләйһәң дуғаңа...

— Ҡыңғырау?! Ә нигә?

— Беҙҙең яҡта кейәүҙәр...

— Мәликә!!!

— Ә һин миңә ҡарсыҡта булғандан һуң... — Мәликә, күрәҙәсенән үҙгәреп, уйсанланып, болоҡһоп ҡайтҡан иренең кәйефен билдәһеҙ көндәшенә ялғап ҡуйғанлыҡтан, өндәшмәй түҙә алманы. — Ҡарсыҡ һине бик ныҡ шатландырып ҡайтарҙы буғай!

— Мәликә, һин... нимә һөйләгәнеңде үҙең белмәйһең!

— Әйтмәгәсең...

— Йөрөп ҡайтайым әле. Ҡарсыҡ һөйләгәндәр уйын хәбәр түгел! — Иренең артынан ишек ябылғас, Мәликә ултыра төштө: «Шулай уҡ ҡарсыҡ быға... Юҡ, юҡ, булмаҫ! Күрәҙәсе тигәс тә, Мәликә тормошоноң бөтә ысынбарлығын ул ҡайҙан белһен? Йә бына уның ирен атһыҙюлһыҙ Мәҙинәнән ҡыҙғаныуы... Телен тыйһа булмай ине микән ни? Әйүпте Мәҙинәнән ҡыҙғанырға уға ниндәй сәбәп бар? Сәбәп юҡ кеүек, ә бына күңел...

* * *

Оло юлға сыҡҡас, аттар ҡатҡыл ҡар өҫтөнән йылдам юртып китте. Һоло ашап, һимереп, юл көҫәп торған хайуандарға Йыһанур ҡарттың хатта сыбыртҡы болғауы ла кәрәк түгел.

Эйе, юлға ат менән сыҡты Әйүп. Күрәҙәсе менән яңынан осрашҡанға тиклем ул күп нәмәне башынан үткәрергә тейеш. Йөрәгенә тыныслыҡ, башына һиллек кәрәк уның. Ҡарсыҡтан сыҡҡас, нишләрен белмәгән Әйүптең иң яҡын кешеһе менән күҙгә-күҙ терәп ултырғыһы килде. Таулылағы бихисап таныштарын күңеленән барлап сыҡҡандан һуң, хәтере Лидия Николаевнаға уҡталды. Эшенә барҙы. Араларында артыҡ хәбәр ҙә булманы кеүек. Ҡара-ҡаршы ултырып, тәмәке

көйрәттеләр. Һүҙ эйәрә һүҙ сығып, Әйүп:

— Лоҡман Талиповичтың теге... һеңлеһе нисек? — тип һорай ҡуйҙы.

— Улмы? — Лидия Николаевна зәңгәрһыу күҙҙәрен түшәмгә теклəп уйлана бирҙе лә бер хәбәр һалды: — Мин уның бер көн килеп айныгып китеүенән... ҡурҡам!

— Ҡурҡаһың? Һауығыу насар эшме ни?

— Эш шунда: Сәбилә бәпәйенең... сепрәктән яһалғанын төшөнәсәк.

— Кеше асылына ҡайтырға тейештер инде.

— Уныһы шулай, ләкин был осраҡта...

— Ниндәй осраҡта?

— Һеҙ миңә, Әйүп Ғәзизович, сигенергә урын ҡалдырмайһығыҙ: Сәбиләгә... һөт төштө...

— Һөт?!

— Һөт, Әйүп Ғәзизович... күкрәк һөтө...

Аптырауҙың сигенә сыҡҡан Әйүп Ғәзизовичты Лидия Николаевна оҙата сыҡты һәм хушлашҡанда күҙҙәренә ҡарап:

— Әйүп Ғәзизович... беҙ бит фронтовиктар. Әйҙәгеҙ әле минең өйгә бер килеп сығығыҙ. Күрәм: һеҙҙең дә һөйләр хәбәрегеҙ эсегеҙҙә күмһетә, — тине.

— Күмһетә, Лидия Николаевна... Бер ултырып алғанда насар булмаҫ ине... Мин бит, — Әйүп үҙенең «һин»гә күскәнен һиҙмәй ҙә ҡалды, — һине ҡарындашым кеүек яҡын күрәм.

— Рәхмәт, Әйүп Ғәзизович. Әйтергә булалыр инде: ул тойғо миңә лә ят түгел.

Шулай айырылыштылар улар. Әллә нисек еңел булып ҡалды Әйүпкә. Лоҡман Талиповичтың һеңлеһе хаҡындағы яңы мәғлүмәт һиҫкәндерҙе уны. Әйүпкә яңыраҡ ҡына Сәбиләнең билдәһеҙ шарттарҙа ғәйеп булған Ихсанбайҙың ҡатыны икәнлеге һәм уның ире өйөнән йөклө китеүе мәғлүм булғайны. Бына нисек! Тимәк, Сәбилә һуғыш йылдарында ауыл советын етәкләгән Ихсанбайҙың ҡатыны! Ә Ихсанбай теге күрәҙәсе менән Сибәғәттең, ҡарсыҡ әйткәнсә, Диңгеҙхандың улы! Ул сағында, эҙ йәшерергә була исем-фамилияларына тиклем үҙгәрткәс, ни өсөн ул ҡарсыҡҡа янған өй урынын яңынан ҡаҙҙырыу, хәҡиҡәтте асыҡларға маташыу кәрәк булды? Хашимды ҡотҡарыу өсөнмө? Ә Хашим уға ни бысағыма? Хашим Мәҙинәнең атаһы. Ә Мәҙинә... Тимәк, барыһы ла Мәҙинәгә барып тоташа! Мәҙинә кем уға? Эйе, эйе... Ул саҡта ҡарсыҡ әйткәйне, бөтәһенең дә бала хаҡына эшләнеүенә ишара яһағайны... Бәлки, Мәҙинәне күреү, уның менән һөйләшеү күп нәмәгә асыҡлыҡ индерер?

Унан һуң ҡарсыҡ үҙе лә бит хушлашҡанда: «Был — һөйләшеүҙең башы ғына. Дауамы булыр. Әҙерәк башың һил булғас килерһең, — тине. Шунан ул көлөмһөрәне: — Әгәр инде ҡулға алырға уйлаһаң... алыҫ ҡаса алмаҫмын. Күп булһа, энә буйы ер китермен. Ә сабыйыңды телле итеү әмәлен мин беләм. Әлегә әйтә генә алмайым».

Бына ул тормош тигәнең: Аллаға ла, муллаға ла ышанмаҫ Әйүп бер туҙып бөткән ҡарсыҡтың им-томона, уның ауыҙынан сығыр һәр һүҙгә интизар.

* * *

Буран нисек ҡапыл башланһа, шулай тиҙ тынды. Уйламаған ерҙә тауҙар яһап, ҡыш башында өйгән убаларын күсереп, ҡайҙалыр юл һалып, ә ҡайҙалыр булған юлды ҡамап, аҙна буйы ауылда ла, ҡырҙа ла, урманда ла хакимлыҡ итеп, бөтәһен үҙ ҡурайына бейеткәндән һуң арып, талсығып тынып ҡалды. Уның ҡарауы әҙәм аҡылы етмәҫ һырҙар менән семәрләнгән көрт күгелйем сафлығы менән ялтырай, ә ҡояш, үҙенең оҙаҡ юғалып тороуына ғәфү үтенгәндәй, бар ғәләмгә йәлләмәйенсә көлтә нурҙарын сәсә. Ферма һыйырҙарын да кордонға сығарғандар. Аслыҡтан, һыуыҡтан миктәгән малдар, шауҡал ҡабырғаларын ҡояшҡа ҡуйып, әкрен генә, туҡлыҡтың, йылының ҡәҙерен белеп кенә, көйөш ала.

Көн йонсоуынан арыған малсылар ҙа, йыйылышып, тәмәке көйрәтә. Урталарында, санаға йәйелеп ултырып алғаны, Шәңгәрәй булыр. Үгеҙҙән һөҙөлөп, һөйәк-һаяғы имгәнеп, мунсала дауаланып ятҡандан һуң, был уның халыҡ араһына тәүләп сығыуы. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы була икән тигән һүҙҙең Рауза ауыҙынан сығыуы ҡорсотоп ебәрҙе уны. «Ебәрмәһәң, ҡашып барам!» — тигән белдереү яһағас, Рауза уға ошо муйынын боғалаҡтай ҡыҫып, быуып ҡына барған аҡ күлдәкте кейҙерҙе. Аҡ күлдәк кейеп алғас, Шәңгәрәй галстук таптыра башланы. Раузаның:

— Ул нимәгә һиңә? Уны түрәләр генә тағасы у! — тигәнен ишеткәс, Шәңгәрәйҙең ене ҡупты.

— Тап тигәш, тап! Түрәләрҙең минән ҡайһы ере артыҡ?! — тине ул аяҡ тибеп. Башҡа берәү булһа, бәлки, ыжламаҫ та ине, кеше йәнле Рауза, етем хаҡы — тәңре хаҡы тип, магазинынан килтереп бирҙе галстукты. Галстуктың ҡыҙыл булыуы ғына Шәңгәрәйҙе сирылырға мәжбүр итте:

— Раужа әпшәй, мыны шикелдене мәктәп балдары таға!

— Атаҡ, уларҙыҡы икенсе бит. Уларҙыҡы — өсмөйөш! Был нәстәйәшней ирҙәрҙеке! Самай һинеке!

— Ирҙәр ҡыҙылды тағамы?

— Таҡмаһа, хөкөмәт уны нимештәп сығарһын?! Түлке күберәгенә тәтемәй!

— Ярай, этү тағайым...

Аҡ күлдәк, ҡыҙыл галстук, Рауза алып биргән йәшел пинжәк, ҡара салбар тышынан Хөсәйен өҫтөнән систерелгән, ләкин ҡарамаҡҡа ярайһы бөтөн һырма, табанлы булһа ла әллә ни һыйы китмәгән аҡ быйма, ҡышҡы ҡуян тиреһенән тегелгән, хужаһының өлкән башында ҡош ояһы һымағыраҡ сүҡайып ултырған бүрек кейгән Шәңгәрәй, теге ҡазанан һуң беленерлек һылтаҡлап, ләкин таяҡһыҙ көйөнсә ферма юлы буйлап өҫкә күтәрелде.

Бына ул фермала эшләгән барлыҡ ир-аттың иғтибар үҙәгендә, мул итеп һалам түшәлгән санаға ялпашҡан.

— Шәңгәрәй, кем һине былай кейендерҙе?

— Раужа әпшәй!

— Ярата икән әпсәң үҙеңде!

— Ыжнамы ярата! Мин матур, иссу аҡылды.

— Шәңгәрәй, ә улар һине асыҡтырмаймы?

— Асау — мына! — Шәңгәрәй эшһеҙ-шөғөлһөҙ ятыуҙан ағарып, нәҙегәйеп ҡалған бармаҡтары менән үңәсен ышҡыны. — Айыу ите асаныҡ! Күп айыу ите!

— Уны ҡайҙан алдығыҙ?

— Раужа-әпшәйҙең ире, теге убыр атып алды!

— Кит, әй, булмаҫты!

— Ышын!

— Юҡты!

— Ант! Үҙем исеттем! Атты!

— Ҡайҙа ишеттең? Һин бит сығып йөрөмәнең!

— Кәртәлә атты! Аҙаҡ айыуҙың басын ҡыйҙыҡҡа күмде! Исек ярығынан ҡарап торҙом! Басы һур айыуҙың! Һыйырҙыҡы исе мөгөҙҙәре бар... У-у-у, мин ҡурҡтым!.. Убыр тисектән ҡарап торғанымды күрһә, еффәрә ине...

— Ха-ха-ха! Айыуҙың мөгөҙө бар тиһеңме?

— Иссу нишек!

— Ха-ха-ха!

Шәңгәрәй һөйләй, ир-ат эсен тырнап көлә.

— Ҡасаныраҡ булды был хәл, Шәңгәрәй?

— Әллә ҡашан... Айыу ите бөттө... Раужа әпшәй хәҙер ыумаш ҡына асата.

— Ә һин нигә өйҙә генә йәшәмәйһең, Шәңгәрәй?

— Ы!

— Нигә «ы»? Мунсала йәшәйҙәр тиме ни?!

— Өйгә убыр эйәләсте. Йә атыр... йә нимә эстәр... юҡ, инмәйем...

Ир-ат Шәңгәрәйгә ҡарап хахылдап тороп, эргәләренә Мирхәйҙәров менән Камалетдиновтың килеп баҫҡанын да шәйләмәне.

— Һаумыһығыҙ әле, кәңәштәр берекһен!

— Ул ниндәй эш ваҡытында өймәктәшеп тороу? — асыуы килгән Мирхәйҙәров Шәңгәрәйҙе күреп ҡалды. — Ә һин, ҡустым, тағы үгеҙ ҡоторторға килдеңме?

— Ниместәп мин эт менән эт булайым ти, Ажат ағай?

— Кеше үгеҙ эргәһенә... ҡыҙыл галстук тағып киләме? Ә һеҙ, һаҡаллы сабыйҙар...

Малсылар йыуаш ҡына көлөшөп алдылар:

— Мына... Шәңгәрәй атаһының аҙбарҙа айыу атҡанын һөйҙәне лә...

— Вәт әй! Айыуы мөгөҙҙө булған бит әле!

— Ха-ха-ха!

Таралыша башлаған малсылар артынан Шәңгәрәй ҙә туйтаңланы. Мирхәйҙәров бүркен сисеп, әйләндергеләп, кире кейҙе:

— Хашимдың бәләһенең башы ошо иҫәрҙән башланды бит инде!

— Бәй, был теге тоҡом үгеҙенә балта сапҡан...

— Шул инде, шул... Ишмәмәттең алйото. Шәңгәрәйҙән башҡа кем фермаға аҡ күлдәк өҫтөнән ҡыҙыл галстук тағып килһен!

* * *

Йыйылыш колхоз председателенең хужалыҡ эшенә йыллыҡ йомғаҡ яһауынан башланды. Камалетдинов колхоздың күрһәткестәрен районның башҡа хужалыҡтары менән сағыштырҙы. Уртаса алғанда барыбер башҡаларҙан әллә ни артта ла ҡалмайҙар, алға ла сыҡмайҙар.

Малсылыҡ буйынса ла дөйөм алғанда насар түгел. Камалетдинов эргәһендә ултырған йәш ҡатынға күҙ ташланы. Ғәлимә Минһажева тигән алдынғы һауынсы ошо, күрәһең. Төҫкә-башҡа таҙа ҡатын, кәкесерәк танауы ла үҙенә килешеп торғандай. Баҡһаң, Мәҙинәнең дә күрһәткестәре насар түгел икән. «Тана һыйырҙар һауыуына ҡарамаҫтан, икенсе урында килә», — тип әйтелде докладта. Камалетдинов залдың бер мөйөшөндәрәк ултырған Мәҙинәне күреп ҡалды. Килгән. Фермала ул ни өсөндөр күренмәне. Ыҡсым ғына пальто, башына берет кейгән. Был килеш ул теге дәүерҙәге гимназисткаларҙы хәтерләтә. Уның эргәһенә аҡ кәпәсле, ҡыҙыл галстуклы, иләмһеҙ ҙур башлы фермала күренеп ҡалған диуана ҡунаҡлаған. Үҙе шулай ғына булһа ла, кем эргәһенән урын ала белгән бит әле! Камалетдиновтың хәтеренә Гюго романындағы Эсмеральда менән Квазимодо килде.

Тәбиғәттең ҡушыуымы был... Моцарт тыуған ерҙә мотлаҡ Сальери ярала, Матурлыҡ менән йәнәш ғәриплек йөрөй. Мәҙинәнең, эргәһендәге ғәриплектән ғәрләнмәй, үҙен тыныс һәм кеселекле тотоуы аптыратты Әйүпте. Тегеһенең һорауҙарына яуап рәүешендә башын ҡағып, һүҙ ҡушып та ала. Ә үҙе юғары!.. Бынау тәпәш түшәмле, стеналары һыҙырылып бөткән клуб ишараһы ла, үҙ хәсрәттәренә, ғәмдәренә, донъя мәшәҡәттәренә сумған колхозсылар ҙа — береһе лә Мәҙинәнең булмышына йәбешмәгәндәй. Уны кесерәйтә, тәпәшәйтә, меҫкенләтә торған көс юҡ кеүек донъяла...

Камалетдинов, Мәҙинәнән ҡарашын көс-хәл менән айырып, йәнә докладты тыңлай башланы. Мирхәйҙәровтың: «Ҡатмарлы тәбиғәт шарттарында бөтә колхоз малы аслыҡтан ҡырылыу хәүефе аҫтында ҡалғанда үҙенең ялҡынлы мөрәжәғәте менән халыҡты малсылыҡҡа ярҙамға күтәргәне өсөн Мәҙинә ҡарындашҡа йөрәк түренән сыҡҡан рәхмәтемде белдермәй ҡала алмайым...» Зал докладты бүлеп ҡул сапты, баштар Мәҙинә яғына бороло. Эргәһендәге өлкән баш эйәһе, бөтә был алҡыштар үҙенә тәғәйенләнгәндәй, урынынан тороп, сәбәкәй итеүсе халыҡҡа утыҙ ике теше күренгәнсе йылмайҙы, ҡәнәғәт булыуын белдереп баш эйҙе...

Докладтан һуң Камалетдиновҡа ла һүҙ бирҙеләр.

— Килеүен килгәс, сығыш яһамай китмәм. Шулай ҙа, минән алда, бер үк тәбиғәт һәм эш шарттарында колхоз буйынса ғына түгел, район буйынса рекорд ҡуйған Ғәлимә Минһажева һеңлекәш һөйләһен

әле, үҙенең бай тәжрибәһе менән уртаҡлашһын.

Зал буйлап тулҡын-тулҡын шыбырлашыу, кинәйәле көлөү үтте. Бер ни төшөнмәгән Камалетдинов Ғәлимәгә ҡараны:

— Йә, һеңлекәш, ҡыйыуыраҡ бул. Шартлатып эшләгән кеүек, шартлатып һөйлә лә бир!

Ғәлимә торҙо, трибунаға яҡын килде:

— Унын нимәһен һөйҙәйһең? Әҙерәк йоҡтайһың, күберәк эштәйһең, эйе... Курмыны ваҡытында таратып, ваҡытында эсерәһең... Һыйырҙарҙы ваҡытында үгеҙгә ҡушаһың!

Залдан олораҡ бер һауынсы ҡуҙғалды:

— Һинеңсә, беҙ, Ғәлимә, оҙаҡ йоҡтайбыҙ, күп ашайбыҙ, аҙ эштәйбеҙ? Ә ҡасҡыһы килгән һыйыр һинәнминән һорап торамы?

Ғәлимә тотлоҡто. Мирхәйҙәров ҡәләме менән өҫтәл туҡылдатты:

— Тәртип, тәртип! Һүҙ алып һөйҙәгеҙ!

Әммә тороп баҫҡан һауынсы ла бирешергә уйламаны:

— Тәртипте аны һеҙ үҙегеҙ боҙағыҙ! Ғәлимә егерме биш урынына утыҙ ике һыйыр һауа!

Уға тағы бер тауыш өҫтәлде:

— Батрак һыйырҙар биреп ҡуйһағыҙ, кем алда бармаҫ ине!

— Быҙауҙар эскән һөттө лә әйт! Уны ла бит Ғәлимәгә яҙалар!

Ғәлимә уңышһыҙ сығышынан ҡыҙарып-бешеп урынына ултырҙы. Мирхәйҙәров һүҙҙе йәнәт кенә Камалетдиновҡа бирҙе. Район етәксеһенең ҡалын тауышы яңғырауы булды — бөтәһе лә тынысланды, һирәк күренгән ҙур түрәнең ни әйтерен һәр кем ихласлыҡ менән тыңларға әҙерләнде.

Йыйылыштан һуң Камалетдинов концертҡа ҡалмаҫҡа уйлағайны ла, Мәҙинәне күреп һөйләшеү теләге үҙенән көслөрәк булып сыҡты.

Залдағы рәт араларынан тағы тулҡын-тулҡын шыбырлау үтте:

— Камалетдинов... кәнсиртҡә ҡалды...

— Ҡала инде... Беҙҙәге ише йырсыны ул тағы ҡайҙа тыңдай ала?

— Мәҙинә йырҙамай бит хәҙер... имгәнгәндән һуң...

Быларҙы ишетеп ултырған Камалетдиновтың йөрәгенә сөй ҡаҙалғандай булды, түҙмәйенсә, Мирхәйҙәровҡа эйелде:

— Мәҙинә... имгәндеме ни?

— Аҙаҡ һөйләрмен әле... Йәй... тана өйрәтәм тип...

Концерт башланды. Башта партияға дан йырлаған шиғыр һөйләнелде. Шунан... Сәхнә әле асылмаған, ҡалын урман, ҡая таштар араһынан сыҡҡан кеүек «һәү-һәүһәү» тигән яңғырау ишетелә башланы. Шаршау әкренләп асылған ыңғайға йырҙың тәүге һүҙҙәре ҡатын-ҡыҙ башҡарыуында айырым-асыҡ ишетелә башланы:

Урал ҡаяларын ярып үткән,
Ҡырлас таҡыр, берҙәм юл буйлап
Быҙау менән һыйыр ҡайтып
киткән,
Тормағандар улар күпте уйлап...

Инде тауыштар күбәйҙе. Һағыш ҡатыш хозур тынлыҡҡа сумған залда өс тауышҡа бүленгән хор тотош бер аһәң булып яңғыраны:

Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Эҙләп киттем шуларҙы. Һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү...

— Ҡара әле, Азат, был бит профессиональ хор!

Ауыҙы ҡолағына етеп ҡыуанған Мирхәйҙәров уның ҡулын ҡыҫты:

— Мәҙинә, Мәҙинә ойошторҙо!

— Былай булғас, Һарайғырҙың данын хор дауам иттерә инде!

— Нигә... Һарайғырҙар тыуыр әле ул... Тик бит, Әйүп Ғәзизович, һарайғырҙар тыуып ятҡан мәлдә уларға тоҫҡаласаҡ уҡтар ҙа сүкелә башлай.

Хор тамамланғас халыҡ гөж килде. Камалетдинов уларҙың тойғоһоноң эсенә һыймағанын аңлай: ул үҙе лә бындай оҫталыҡ, зауыҡ, ихласлыҡ менән башҡарылған хорҙы тәүләп ишетте.

Артабан йыйылышты икенсе йүнәлешкә бороп ебәрә яҙған халыҡ,

хор башҡарған халыҡ йырынан дәртләнеп, йәнә сығырынан сыҡты. Конферансье «Программала...» тип низер иғлан итергә маташа, ә былар:

— Мәҙинә йырҙаһын! Мәҙинә ҡарындаш! — тип ҡысҡырыша.

«Бейеү...» тип әйтеп ҡалырға ашыға алып барыусы, ә былар:

— Ярай, Вәләүетдин ҡусты күп бейене! Ана, лутсы, ҡыҙҙар артынан сапһын! Ҡыҙҙар таралып бөтә этү! — тип шаулашты. Шул мәл көслө ир тауышы:

— Йәмәғәт! Үҙегеҙгә мәғлүм! Мәҙинә ҡарындашты йәй һыйыр тибеп имгәтте. Йырҙағанын тыңдағығыҙ килгәс, нигә уны шундай эшкә апарып тыҡтығыҙ?! Ҡоштар донъяһында бит, йәмәғәт, һандуғасҡа ҡоҙғон булып ҡорҡолдарға рөхсәт итмәйҙәр!

Камалетдинов Мирхәйҙәровтың бөйөрөнә төрттө:

— Кем ул?

— Хөсәйен... Теге Һарайғырҙы тәрбиәләгән егет...

Концерттың бындай йүнәлеш алыуын көтмәгән Мәҙинә сәхнәгә сыҡты. Өҫтөнә нескә һынының һәр бөгөлөн, һәр һыҙатын белдереп торған көрән ҡыҙыл оҙон күлдәк кейгән, ҡалын оҙон сәс толомдарын иркен генә итеп үреп төшөргән. Уның бөтә булмышы: «Мин гүзәллек! Камиллыҡтың үҙе! Миңә ҡарарға, һоҡланырға мөмкин. Илһам да бирәм кәрәккәнгә, ләкин мин алиһә, мин — мираж!» — ти кеүек. Бына ул әкрен генә атлап халыҡҡа яҡыныраҡ килде.

— Хөрмәтле ауылдаштар! Йырламаҫмын тигәйнем, ләкин... яңыраҡ бурандар арҡаһында килеп тыуған афәтте еңгән ауылдаштарыма хөрмәт йөҙөнән бер генә йыр бүләк итмәксемен.

Уның эргәһенә йәнә ике ҡурайсы килеп баҫты, залға йөрәккә, йөрәккә генә түгел, үҙәктәргә үтер илаһи һәм танһыҡ, ләззәтле һәм һағышлы моң таралды:

Аршын да ғына аршын, ай,
аҡ уҡа,
Камзул итәгенә артмаймы...
Минең дә генә күңелем гел һине
уйлай,
Һинең күңелең мине тартмаймы!
Аршын да ғына аршын, ай,
аҡ уҡа,
Аҡбуҙ атҡайыма — дилбегә.
Килсе лә генә, йәнем, бер үбәйем,
Үпкән ерем ҡалһын билгегә...

Камалетдинов берсә янды, берсә арҡа буйҙары семерләп өшөгәндәй булды. Ул үҙенең тормошондағы иң ҙур афәт тип башта ата-әсәһен юғалтыуҙы һананы; һуғышта әҙме дуҫтарының күҙен йомдорҙо; хәҙер килеп ул шуны аңланы: йәмгә, мөхәббәткә, ғүмер буйы ҡанмаған һөйөлөү хисенә сарсаған уның күңеле. Уға һыуһын булырҙай шишмә эргәлә генә сылтырай, йырлай, гөрләй, ҡояш нурында меҥ дә бер төҫтәр менән балҡый, ләкин Камалетдинов уның менән һыуһын ҡандыра алмай. Ул — башҡаныҡы, дуҫыныҡы. Шишмәкәйҙең уйы ла, хыялы ла башҡа тарафтарҙа...

— Әйҙәгеҙ, әйҙә... Сәрбиназдың бәлеше һыуынып китер...

Мирхәйҙәровтың ҡолағына шыбырлауы Камалетдиновты уятып, айнытып ебәргәндәй булды.

— Эйе, эйе...

Моңға әсир төшкән халыҡ түрәләрҙең залдан сыҡҡанын хатта һиҙмәне лә.

*(Дауамы киләһе һанда)*